ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6-12 октябрь (карасай) 2018

№40 (822)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күмәкләп...**
хәлде яйлап булыр, тиҙәр



5

**Ситтәргә ишек асма, тибеҙ,**
ә интернеттағы "сит ишектәрҙән" тыймайбыҙ...



6

**Тарихыбыҙ - фән генә түгел,**
тормош мәктәбе лә, аҡыл сығанағы ла булһын



8-9

**Ҡар өҫтөндә...**
усаҡ ҡабыҙыр ағинәй ул



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4 октябрҙән 14 октябргә тиклем 2019 йылдың тәүге ярты йыллығына гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителде. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 532 һум 14 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II төркөм инвалидтары - 478 һум 56 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылайыҡ, тип саҡырабыҙ.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Мәғариф өлкәһендәге реформаларға, ҡанундарға уҡытыусы нисек яраҡлаша?

***Рәмил МӘЗИТОВ, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты ректоры, сәйәси фәндәр кандидаты:*** Уҡытыусы һөнәре беҙҙә белем биреүсе, йәшәргә өйрәтеүсе абруй эйәһе булараҡ ҡына түгел, ә замандаштарына яңы ҡараш еткереүсе, башҡаларҙан ун аҙымға алда барыусы алдынғы интеллигенция вәкиле тип тә ҡабул ителә һәм быны башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Һуңғы ваҡыт тормошобоҙ күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән үҙгәрә, кисәге стандарттар бөгөн ҡулланыуҙан сыға, иҫкерә, шунлыҡтан уҡытыу-тәрбиә процесына яңынан-яңы методика һәм технология алымдары индерелә, һанлы мәғариф мөхитен, һәләтле балалар менән эшләү, уларҙың таланттарын артабан үҫтереү бурыстары ҡуйыла. Был мәсьәләләрҙе атҡарыу өсөн мәғариф өлкәһенә белемле, заманса фекерләй белгән уҡытыусылар кәрәк. Бөгөнгө уҡытыусы, ошо йәһәттән ҡарағанда, үҙе лә ниндәйҙер кимәлдә уҡыусы ролен инеп китә, сөнки даими рәүештә һөнәри оҫталығын камиллаштыра барыу өсөн күп уҡырға, күп нәмәне ҡайтанан өйрәнергә тура килә. Заман ҡушыуынса, айырыуса һанлы ресурстар менән эшләү күнекмәләрен үҙләштереү талап ителә.

Эйе, бөгөн уҡытыусының эше дәфтәр тикшереп, дәрес планы төҙөү менән генә сикләнмәй. Күптәр һәр төрлө ҡағыҙ тултырыу, отчет, белешмә яҙыу кеүек өҫтәмә һәм артыҡ мәшәҡәттәрҙең төп эшкә ҡамасаулауына зарлана. Уҡытыусыларҙың быйылғы республика август кәңәшмәһендә шундай бер һан да яңғыраны. Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты мониторингы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Федераль дәүләт мәғариф стандарттарын ғәмәлгә ашырыу өсөн бөтөн кәрәкле технологияларға уҡытыусыларҙың ни бары 20 проценты ғына эйә, тип табылған. Ошо юҫыҡта һәм, ғөмүмән, уҡытыусыларҙы яңы шарттарҙа яңыса эшләргә өйрәтеү йүнәлешендә беҙҙең Мәғарифты үҫтереү институты алдына ла аныҡ бурыстар ҡуйылды. Кәңәшмәлә республика Башлығы Р. Хәмитов әйтеп китеүенсә, "универсаль компетентлы" уҡытыусылар әҙерләү мәсьәләһе бөгөн беренсе планға сыға. 2020 йылдан иһә уҡытыусыларҙы аттестациялауҙың яңы моделен индереү ҡарала.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҠОТЛАЙБЫҘ!*

# Республика көнө менән!

### БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ ГИМНЫ

*Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙҙәре*
*Фәрит Иҙрисов музыкаһы*

*Башҡортостан,*
*Һин һөйөклө ғәзиз ер,*
*Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.*
*Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа*
*Тыуған илдең тыныс ал таңы.*

*Ҡушымта:*
*Дан һиңә, Башҡортостан!*
*Илен һөйгән азат халҡыңа дан!*
*Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә*
*Сәскә ат, Башҡортостан!*

*Башҡортостан,*
*Һин хөрмәтле данлы ил,*
*Еңеү яулап алға бараһың.*
*Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә*
*Һинең ғорур рухлы байрағың.*

*Ҡушымта.*

*Республикам,*
*Йондоҙ булып балҡы һин,*
*Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.*
*Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,*
*Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.*

*Ҡушымта:*
*Дан һиңә, Башҡортостан!*
*Илен һөйгән азат халҡыңа дан!*
*Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә*
*Сәскә ат, Башҡортостан!*
*Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.*




12+

✔ *Мәктәптән төрлө статистик мәғлүмәт, белешмә, отчеттарҙы мәғариф менән бөтөнләй бәйле булмаған ведомстволарҙың талап итеүе уҡытыусы елкәһенә ысынлап та ныҡ ауырлыҡ төшөрә.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КӨСЛӨ ХОЛОҠЛО...

## улдар үҫтерәйек

*Салауат Илгиз улы КИРӘЙЕВ, Өфө сәнғәт училищеһының милли халыҡ уйын ҡоралдары бүлеге етәксеһе:* Уҡыу йортонда күберәк егеттәр менән эшләгәс, улдар тәрбиәләү мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтҡым килә. Улдарыбыҙҙы көслө холоҡло итеп үҫтерәйек әле, милләттәштәр. Ғаиләлә ҡурсалап, һәр бер аҙымын күҙәтеп, кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә, мәктәптәге, урамдағы бар эшенә ҡыҫылып, яҡлап-әпәйләп үҫтергән балалар ҙур ҡалаға килһә, юғалып ҡала. Саҡ ҡына иҫкәрмә әйтһәң дә, күтәрә алмайҙар, күңелдәре кителеп, үпкәләп баралар.

Ир кешенең күңеле ҡаты булырға тейеш, тимәйем мин, тик яҡшы холоҡ, үҙ һүҙең, ҡылығың өсөн яуапһы булыу ҙа биҙәй кешене. Кеше бит ғүмере буйы кемдәндер ниҙәләр өйрәнә. "Һин - иң яҡшыһы, донъяла һинән яҡшы кеше юҡ", тип, эгоист тәрбиәләмәйек, йөрәктәре ошо ғилемгә, белемгә асыҡ булһын. Шул саҡта дөйөм ятаҡта булған бәләкәй генә ваҡиғаны ла еңел кисерерҙәр, тиҫтерҙәре менән дә уртаҡ тел таба алырҙар, ауырлыҡтар уларҙы сынығтырыр ғына. Беҙҙең атайҙарҙың көн һайын эргәбеҙгә ултырып һөйләшергә лә ваҡыттары булманы, көнө-төнө эшләнеләр. Бәлки, шуғалыр ҙа, үҙ аллы булып үҫтек. Малай кеше күп нәмәне үҙе хәл итә белергә тейеш, үҙемдең улымды ла артыҡ тыймайым, киреһенсә, ирек бирергә тырышам.

Бөгөн заман да башҡа, тиерһегеҙ. Әммә беҙгә хәҙер бигерәк тә балаларҙы рухлы итеп тәрбиәләү мөһим. Туған халҡын яратырға өйрәнһә, уның менән ғорурланһа, туған телендә лә һөйләшәсәк, башҡалар алдында үҙ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәтен яҡлап, һүҙ әйтеү өсөн белеме лә буласаҡ. Шөкөр, ундай егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ ҙа күп. Рухты иһә ҡурайыбыҙ, оҙон көйҙәребеҙ ҙә уята. Беҙгә килеп уҡый башлауҙары була, егеттәр күҙгә күренеп үҙгәрә. Сөнки көй менән бергә, уның легендаһын, тимәк, халҡыбыҙҙың тарихын да өйрәнә. Белгәне күңелен үҫтерә, рухын уятып ебәрә. Шуға ла ҡурай дәресе һәр мәктәптә булһын ине. Республикала һәр ауылында ҡурай дәресе булған районлдар ҙа, бер ҡурай түңәрәге булмағандары ла бар. Бында барыһы ла урындағы етәкселәрҙән, уларҙың башҡорт мәҙәниәтенә булған мөнәсәбәтенән тора. Нисек кенә булмаһын, һәр башҡорт егете ҡурайҙа уйнай белергә тейеш, тип иҫәпләйем. Ана, ҡаҙаҡтарҙа яҙылмаған ҡанун бар: һәр ҡаҙаҡ ҡыл ҡумыҙҙа һәм думбырала уйнай белә. Борон ата-бабаларыбыҙ ҙа баланың уйын ҡоралында уйнай белеүен хуплаған, сәсәндәр ниндәй ихтирамға эйә булған! Бәлки, ошо миҫалға беҙ ҙә эйәрербеҙ?

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Мәғариф өлкәһендәге реформаларға, ҡанундарға уҡытыусы нисек яраҡлаша?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА, М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы директоры:*** Егерме беренсе быуатта бөтөн ғәмәлдәр ҙә ҙур тиҙлектә башҡарыла. Был үҙ сиратында уҡытыусыларҙың да үҙ эштәрен башҡарыуҙа шундай уҡ тиҙлек талап итә. Заман талаптарына яраҡлашыуы еңелдән түгел, әлбиттә. Бигерәк тә уҡытыутәрбиә эшендә. Үҙ белемеңде камиллаштыра барыу өҫтөнә даими рәүештә отчет һәм пландар төҙөү йөкмәтелә икән, бының эшкә ыңғай тәьҫире хаҡында һүҙ алып барыуы ҡыйын, шуныһы хафаландыра. Ә инде, бая әйткәнемсә, һәр эште тиҙ арала һәм йәһәт кенә башҡарып сығы белгәндәргә был әллә ни "ауырткан" мәсьәлә лә булып тормайҙыр. Был йәһәттән мин айырыуса йәштәрҙе күҙҙә тотоп әйтәм. Улар техник һәм электрон саралар менән дуҫ, креатив фекерләү ҡеүәһенә эйәләр, шуға ла ҡағыҙ яҙыу-тултырыу мәшәҡәттәрен тиҙ арала башҡарып сығалар һәм был эш уларҙың ҡулдарын "бәйләп" тотмай. Урта һәм өлкән быуын уҡытыусыларына, ғәҙәттә, ауырғараҡ тура килә, зарланыуҙарҙы ла күберәк улар ауыҙынан ишетелә. Төрлө дауаларҙа мәктәптәр иңенә йөкмәтелгән бындай "кәнсәләр" бурыстарҙы кәметеү тураһында һүҙ бара инде, тик әлегә хәл үҙгәрешһеҙ ҡалып килә. Дөйөм рәүештә генә булһа ла уҡытыусының был "ҡағыҙ тултырыу" эштәрен аныҡлап киткәндә, шул күренә: улар алдында әллә ни кәрәкмәгән бурыстар ҡуйылған, тип тә әйтеп булмай, сөнки уҡытыусы иң беренсе үҙенең төп эшмәкәрлеген планлаштыра, күҙаллай. Һәр класс, алып барған һәр фәнен уҡытыу буйынса йыллыҡ эш программаһы, план төҙөлә. Мәсәлән, тарих уҡытыусыһы үҙе генә лә 4 фәндән дәрес алып бара: тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, шуға өҫтәп, хәҙер хоҡуҡи белем нигеҙҙәре өйрәнелә һәм донъя художество мәҙәниәте; унан ҡала календарь тематик план һәм, өсөнсөһө, һәр дәрескә план төҙәлергә тейеш. Был эштәрҙе электрон форматта башҡарыу ҡулайлы, ә өлкән, урта быуын уҡытыусылар уны күбеһе ҡулдан яҙа.

Дәрес, I-IV һәм V-IX кластарға бүлеп, эш пландарын дөйөм күләмдә төҙөп, аҙаҡ уға төҙәтмәләр, аныҡлауҙар, өҫтәмәләр индерә барыу юлы менән бурысты еңеләйтергә лә мөмкин бит әле. Уҡыу йылы аҙағында тағы ошо пландарҙың үтәлешенә йомғаҡтар, анализлау талап иткән отчеттар яҙыла. Эш стилендә яңылыҡтар, үҙгәрештәр һәм йөкләмәләргә кеше психологияһы, ғәҙәттә, ҡаршылыҡлы мөнәсәбәттә була, ләкин уны башҡара, уға күнегә килә, быны менән килешә. Был осорҙо мин күсеү осоро тип атайым, ул яйға һалына бара. Планһыҙ булмай, ул эште системаға һалыу өсөн кәрәк, ләкин уҡытыусының төп эшенән айыра, ваҡытын күп ала. Был мәшәҡәттәрҙән һәм белем биреүҙән тыш бит уҡытыусының тәрбиә эштәре һәм кластан тыш саралар кеүек йөкләмәләре лә бар. Ә бына мәктәптән төрлө статистик мәғлүмәт, белешмә, отчеттарҙы мәғариф менән бөтөнләй бәйле булмаған ведомстволарҙың талап итеүе уҡытыусы елкәһенә ысынлап та ныҡ ауырлыҡ төшөрә. Унан "котолоу" юлы - әле әйткәнемсә, эште башҡарыу тиҙлеге һәм сифатына бәйле.

***Рифат ӘЙҮПОВ, Ишембай ҡалаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2012" еңеүсеһе:*** Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, мин ошо өлкәлә һуңғы ваҡыттағы күрһәтмәләр һәм реформаларға ҡағылышлы фекерем хаҡында бер-ике һүҙ әйтеп китергә теләр инем. Ошо көндәрҙә Өфөлә башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусыларының кәңәшмәһе булып үтте. Унда "Башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһы"н булдырыу мәсьәләһе ҡаралды (Был туралаентекләберәк гәзитебеҙҙең 5-се битендә уҡығыҙ - **Ред.**). Республикала (хәйер, был Рәсәйҙең күп милләтле башҡа төбәктәренә лә хас) әсә телен уҡытыу мәсьәләһе буйынса тартҡылаш, ығы-зығы, күрһәтмәләр, үҙгәрештәр, инструкциялар туған телдәр уҡытыусылары нервыларында аҙ уйнаманы. Хатта прокуратура тикшереүенә тиклем барып еттеләр бит! Ошондай шарттарҙа уҡытыусы нисек итеп тыныс ҡына белем бирә алһын? Был, һис шикһеҙ, уҡытыусы кәйефенә, һаулығына, хатта яҙмышына кире йоғонто яһай, артабанғы педагогик эшмәкәрлегенә аяҡ сала. Туған тел өйрәнеүҙе ирекле итеп ҡуйыу был дәресте, ғөмүмән, юҡҡа сығарыу буласаҡ. Шуға күрә, "Башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһы" булдырыу көнүҙәк мәсьәлә ине, Рәсәйҙең күп милләтле башҡа төбәктәрендә был йәһәттән дәррәү эш башланған да инде. Ә бит төптәнерәк уйлап ҡараһаң, туған телдәр уҡытыусылары миссияһы уғата яуаплы һәм мөһим - балаларға белем биреү, дәрес, хатаһыҙ яҙырға өйрәтеү генә түгел, ә уларҙы илһөйәр һәм телһөйәрҙәр, йәғни ысын кеше, ватансылар итеп тәрбиәләү бурысы ла йөкмәтелә уларға. Был иһә әсә теле фәнен уҡытыусының балаларға рухи, әхлаҡ һәм эстетик тәрбиә мәсьәләләре менән туранантура бәйләнешенә лә бер ишара. Аҡыллыға - ишара, тигәндәй...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Уҡыусыларыбыҙҙың төп өлөшөн тәшкил иткән дуҫтарыбыҙҙы - уҡытыусыларҙы һөнәри байрамдары менән ихлас ҡотлайбыҙ! Фиҙаҡәрлек, тоғролоҡ, яуаплылыҡ өлгөһө булған вазифағыҙҙы атҡарыуҙа уңыштар, түҙемлек, ныҡлы һаулыҡ һәр саҡ таяныс булһын.**

**"Киске Өфө"ләр.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Ошо көндәрҙә 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер "Көрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма", Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан", Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Зөлфиә Ханнанованың "Мин башҡорт тип танышығыҙ", Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр", Миләүшә Ҡаһармановандың "Күңелем йылы теләй", Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской республики", "2019 йылға башҡортса дини календарь" һәм башҡа китаптарға эйә буласаҡ.**

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһының пенсиялар тәғәйенләү һәм түләү мәсьәләләре буйынса айырым закон сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы федераль законға ҡул ҡуйҙы. Пенсия ҡануниәтендәге үҙгәрештәр тураһында документ 2019 йылдың 1 ғинуарында үҙ көсөнә инер тип күҙаллана. Хәҙер хаҡлы ялға сығыу йәше ҡатын-ҡыҙҙарға - 60, ир-егеттәргә 65 йәшкә тиклем арттырылды. Документты 27 сентябрҙә Дәүләт Думаһы ҡабул итте, 3 октябрҙә уны Федерация Советы хупланы.

✔Өфө хакимиәтенең элекке башлығы Ирек Ялалов рәсми рәүештә Башҡортостандан сенатор булды. Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко уға Федераль Йыйылыштың юғары палатаһының 443-сө ултырышында Федерация Советы ағзаһы танытмаһын тапшырҙы. Ирек Ялалов ағымдағы йылдың сентябрендә республиканан Федерация Советының бынан алдағы ағзаһы Рафаил Зинуровтың биш йыллыҡ ваҡыты тамамланғандан һуң эш башлаған ике сенаторҙың береһе булды. Федерация Советында Башҡортостандан Лилиә Ғүмәрова ла эшләүен дауам итә. Ул фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе урынбаҫары вазифаһын биләй. Уның вәкәләттәре 2019 йылдың сентябрендә тамамлана.

✔Ырымбур өлкәһенең Үрге Ильяс ауылында башҡорт әҙәбиәте классигы Мөхәмәтша Буранғоловҡа стела асылды. Стелала яҙыусының портреты, әҫәрҙәренең геройҙары һүрәтләнгән һәм уның хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт яҙылған. Асыу тантанаһы 5 октябрҙә булды һәм яҙыусының 130 йыллығына арналды. Мөхәмәтша Буранғолов (1888-1966) - халыҡ сәсәне, драматург, "Урал батыр" эпосын яҙып алған, шулай уҡ киң ҡатлам уҡыусыларға башҡорт халҡының башҡа рухи хазиналарын асҡан ғалим-фольклорсы.

✔Өфө ҡала Советы баш ҡала хакимиәте башлығының бушаған урынына конкурс иғлан итте. Хәбәр ителеүенсә, баш ҡала хакимиәтен 2011 йылдан етәкләгән Ирек Ялалов Федерация Советы ағзаһы итеп һайланды, шуға үҙ вазифаһын ҡалдырҙы. Конкурста теләгән һәр кем үҙ көсөн һынап ҡарай ала. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус проекттар бүлеге тулы инструкция әҙерләне: кем мәр була ала, ниндәй документтар кәрәк һәм уларҙы ҡайҙа алып барырға.

*ИШАРА*

# БАШҠОРТ МӨХТӘРИӘТЕНЕҢ АСЫЛЫ -

## ер хужаһы булыу һәм башҡаларҙың ошо хоҡуҡты таныуы

**Быйыл 28-се тапҡыр Республика көнөн билдәләп, байрам саралары уҙғарырға йыйынабыҙ. Тәүҙәрәк "суверенитет" тигән ҡолаҡҡа ятыраҡ һүҙ менән атай инек был көндө. Был латин һүҙенә үҙ аллы, үҙ иленә үҙең хужа булып йәшәй алыу, бойондороҡһоҙ булыу мәғәнәһе һалынған. Әммә Рәсәй составындағы республикаларҙың бындай статусы бер тиҫтә йыл үтеүгә юҡҡа сығарылды, сөнки ил башлыҡтары бындай сәйәси хәлде Рәсәй өсөн хәүефле, тип һанай ине.**



Башҡортостан, Татарстан кеүек тотороҡло иҡтисады, совет осоронда ла аҙмы-күпме автономиялы булып йәшәү тәжрибәһе булған төбәктәр ошо бер тиҫтә йыл эсендә лә үҙаллылыҡтан (ул ни тиклем сикләнгән булмаһын) файҙаланып, иҡтисади, социаль һәм рухи-мәҙәни өлкәләрҙә байтаҡ уңыштарға өлгәште. Ил таянысы булырҙай төбәктәрҙең нығыныуы Рәсәйҙә тотороҡлолоҡ урынлаштырыуға ҙур өлөш индереүенә ҡарамаҫтан, республикаларҙың үҙҙәрен ирекле дәүләт тип атауы үҙәктәге сәйәсмәндәрҙең теңкәһенә тейә ине. Йәнәһе, Рәсәй суверенлы дәүләт булғас, уның составындағы башҡа субъекттарҙың ошондай уҡ билдәләмә алырға бер ниндәй хоҡуғы юҡ булып сыға инде. Ә бына Германия Федератив Республикаһының Башҡортостан бөгөн дә тығыҙ хеҙмәттәшлек алып барған бер субъекты Ирекле Саксония дәүләте тип атала. Тимәк, бер суверенлы ил, йәғни федерация булып берләшкән төбәктәрҙең ирекле дәүләт тигән атама йөрөтөүе цивилизациялы илдәрҙә бер ниндәй ҙә ҡапма-ҡаршылыҡ тыуҙырмай. Сөнки халыҡ-ара хоҡуҡи документтарҙа ла "Сикләнгән суверенитетлы дәүләт" тигән төшөнсә бар бит! Ә бит Башҡортостандың да, башҡа республикаларҙың да Рәсәйгә һәр саҡта ла тоғро ҡалыуы тарих тарафынан нисәмә тапҡыр раҫланғаны тураһында ентекләп һөйләп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр. Республикаларҙы бер нигеҙһеҙ сепаратизмда ғәйепләргә тырышыусылар Чечняға һылтанырға күнеккән, әммә ундағы ҡыйралышҡа ваххабизм менән бер рәттән, ул саҡтағы етәкселәрҙең сәйәси көрәшлеге алып килеүе бер кемгә лә сер түгел. Аллаға шөкөр, беҙҙә ваххабизм тигән дини сир таралһын өсөн ерлек булманы һәм булмаясаҡ, унан һуң башҡорт менталитеты үҙенең иҫ китмәле, хатта үҙенә ҡай сағында зыян килтергән толерантлығы менән айырылып тора. Тик шуныһы үкенесле: ваҡытында беҙҙең үҙ позициябыҙҙы һаҡларға ла, тейешле кимәлдә яҡларға ла ихтыяр көсөбөҙ етмәне.

Бөгөнгө йәшәйешебеҙгә, үҙ-үҙебеҙгә объектив баһа бирәйек, тиһәк, иң элек хәҙерге көнитмешебеҙҙе тарихи күҙлектән сығып ҡарарға кәрәк. Үҙенең "Бородино" тип аталған киң билдәле шиғырында Михаил Лермонтов та замандаштарына ҡарт яугир һүҙҙәре менән "Баһадирҙар - һеҙ түгел!" тип әйткән бит. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа сит-яттарға баш биреп, башҡаларға буйһоноп йәшәмәҫ өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләгән. Юғиһә, "Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын!" тигән тиңдәшһеҙ йыр юлдары аша боронғо башҡорт иленең һүнмәҫ даны беҙҙең көндәргә килеп тә етмәҫ ине. Әйҙәгеҙ, Башҡортостаныбыҙ тарихына уйҙа ғына сәйәхәт ҡылып, ошо боронғо башҡорт батырҙары-баһадирҙарының бик күп быуаттар буйына үҙ иленең, үҙ еренең төп хужаһы булып йәшәй алыуы серен асыҡлап ҡарайыҡ.

Беҙҙә, кинәйәләп, "Эт - ояһында, халыҡ - үҙ илендә көслө", тиҙәр. Башҡорттоң борон-борондан үҙ иле булып, үҙ иленең баш ере Уралда булған. Хатта тарихҡа тиклемге тәү тормош дәүерендә лә халҡыбыҙ үрсеп китер этник ойотҡо - генетик һәм лингвосемантик "баш" ошонда - Урал итәктәрендә яралған, һәм йәшәйештең иң боронғо төпкөлдәрендә барлыҡҡа килгән башар ҡәбиләләренең тора-бара "башғар - башғарт - башҡорт"ҡа әйләнеүен тарих ҡанундары инҡар итмәй. Әгәр шулай булмаһа, XX быуат баштарына тиклем һаҡлана килгән башҡорт аҫабалығы Рәсәй тарихының уникаль күренешенә әйләнмәҫ тә ине. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: заманында Европа һәм Азия илдәрен дер һелкетеп торған Рәсәй империяһының абсолют монархияһы ла башҡорт ерҙәренең, уның бихисап тәбиғәт байлыҡтарының төп хужаһы итеп танырға мәжбүр булған беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙы.

Әлбиттә, донъя халыҡтарына билдәле башҡорт яугирлығын да иҫәпкә алмай ҡалмағандыр Рәсәй батшалары. Урыҫ кенәзлектәре тарих аренаһына яңы ғына сыға башлаған замандарҙа, йәғни I мең йыллыҡ аҙаҡтарында уҡ башҡорт иле лә, уның тирәяҡҡа дәһшәт сәсеп торған яугирҙары Евразия киңлектәрендә генә түгел, алыҫ Ҡытайҙан алып Византияға тиклемге ерҙәрҙәге дәүләттәрҙә танылыу таба. 922 йылда бер нисә йөҙ яугир һағында Булғарға йүнәлгән ғәрәп хәлифе илселегенең башҡорт еренә етер-етмәҫтән оло хафаға төшөүе тураһында Ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырған мәғлүмәт кенә лә ни тора! Бына нисек бит ул: башҡорт еренә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ һис кем инә алмаған. Был башҡорт иле һаҡсыларының аяуһыҙ яуызлығын түгел, ә ошо илдең үҙаллы һәм бойондороҡһоҙ булыуын аңлатмаймы ни? Ә бына ошо мәғлүмәттең тирәяҡтағы халыҡтарға киң билдәлелеге боронғо башҡорт "дипломатияһы"ның бик уңышлы һәм йоғонтоло булыуын аңлатып тора. Һәм ошолай фекер йөрөтөүҙә тарихи дөрөҫлөккә һис бер хилафлыҡ юҡ: башҡорт яугирҙарының айырым төркөмдәре Иранда, Мысырҙа, хатта мадъяр короленең Тәре һуғышында ҡатнашҡан ғәскәрҙәре сафтарында ла оло ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәтеп, уларҙың башлыҡтары сардар дәрәжәләренә тиклем күтәрелә.

**(Дауамы 7-се биттә).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

***64-се күҙәтеүем.*** Бөгөн "Юлдаш" радиоһы егеттәре Халыҡ-ара Олимпия комитеты (МОК) тирәһендә барған низағтар тураһында һөйләште. Мин үҙ һүҙемдә ҡалам барыбер: низағтарҙың сәбәбе сәйәсәткә түгел, фәнгә бәйле. Беҙҙекеләр МОК-тың ҡуйған дәғүәләрен үҙебеҙҙең фәнни ҡаҙаныштарға нигеҙләнеп кенә кире ҡаға ала бит. Беҙҙә иһә фәндә лә оптималләштереү бара. Ни өсөн фәнебеҙ үҫешә алмай? Сөнки иҡтисадыбыҙ "иҙәндә" ята. Ни өсөн иҡтисад һөйрәлә? Сөнки фәнебеҙ саҡ тын ала. Ә кемдәр был сәйәси мәсьәлә тип әйтә, улар Лениндың һүҙҙәрен иҫкә төшөрһөн: "Сәйәсәт - ул иҡтисадтың бер дәүмәлгә тупланған сағылышы" ("Политика - это концентрированное выражение экономики"). Әгәр ҙә иҡтисадыбыҙ үҫешкән булһа, фәнебеҙ ҙә юғары булыр ине (йәки киреһенсә), ул сағында беҙгә бер ниндәй "МОК" та, "МОП"та дәғүәһен белдерергә баҙнат итмәҫ ине. Көслөләргә дәғүә белдермәйҙәр.

***65-се күҙәтеүем.*** Ураҙамдың бөгөн 47-се көнө. Яйлап-яйлап "эске туҡланыу", йәғни быға тиклем тупланған "запас иҫәбенә туҡланыу" механизмын үҙләштерәм. Осоп тиерлек йөрөйөм. Асығыу тойғоһон еңдем шикелле, кис ауыҙ асыу мөҙҙәте килеп етһә лә, ашағы килмәй. Баҡтиһәң, донъяла иң дөрөҫ туҡланыусылар балалар икән. Улар иртәнге, төшкө, киске аш тигән шартлы туҡланыу ҡағиҙәләрен ҡабул итмәй, йәғни асыҡҡас ҡына ашарға һорай. Яңыраҡ бер дини китапта уҡыным. Унда Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һүҙҙәре килтерелгән. Уның әйтеүенсә, барлыҡ ауырыуҙарҙың сәбәбе - ашҡаҙандағы ризыҡ эшкәртелеп бөтмәйенсә, өҫтәмә рәүештә ашау.

***66-сы күҙәтеүем.*** "Оптимизм юҡ ул, мәғлүмәт етешмәүе генә бар" тип әйтеүселәр осрай. Уларҙың фекеренсә, нимәлер хаҡында барыһын да белеп бөтмәгән кеше генә яҡты киләсәкте күрә ала. Бик бәхәсле. Мин, мәҫәлән, киреһенсә: халҡыбыҙҙың үткәне, шанлы тарихы хаҡында күберәк белгән һайын үҙемде күберәк оптимист итеп тоям. Мостай Кәрим менән дә килешәм: халҡыбыҙ азатлыҡ өсөн көрәшмәгән, ә азатлығын юғалтмаҫ өсөн көрәшкән, тимәк, ҡол булмаған. Әгәр ҙә ҡол булһа, регуляр ғәскәре булған дәүләткә өс быуат буйына ҡаршы тора алмаҫ ине.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика Башлығы Указы менән элекке дүрт министр - Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының элекке урынбаҫары Николай Хорошилов, элекке торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Сергей Афонин, быға тиклем Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығын етәкләгән Андрей Иванюта, элекке финанс министры Рида Собханҡолова алтынсы саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа яңы вазифаларға тәғәйенләнде.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Указдары менән 2011- 2018 йылдарҙа Ҡырмыҫҡалы районы башлығы булып эшләгән Фәнзил Сыңғыҙов - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары һәм Руслан Хәбибов республиканың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры итеп тәғәйенләнде.

✓ Өфөнөң Көньяҡ зыяраты биләмәһендә "Муниципаль хушлашыу йорто" асылды. Үткән көндәрҙә бында тәүге матәм йолаһы уҙғарылды. Ҡала хакимиәте йөкләмәһе буйынса төҙөлгән Хушлашыу йорто махсус бүлмәләрҙән һәм мәрхүм менән хушлашыу, йыназа уҡыу, һаҡлау һәм ерләр алдынан үлгән кешене әҙерләү өсөн заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған залдарҙан торған бер комплекс. Хушлашыу йортонда йыназа уҡырға һәм иҫтәлекле даталар уҙғарырға мөмкин.

✓ Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты пленумында республика мөфтөйө вазифаһына дәғүәселәр билдәләнде. Беренсе кандидат - республиканың ғәмәлдәге мөфтөйө Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин. Икенсе - Сибай имаммөхтәсибе һәм Урал аръяғы ҡазыйы Әғләметдин Ғәзизов. Өсөнсө - "Фәтхислам" мәсете имамы (Өфө ҡалаһының 8 март ҡасабаһы) Айнур Бирғәлин. Дүртенсе - Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының хаж буйынса комитеты етәксеһе Илшат Хафизов. Төбәктең баш мөфтөйө вазифаһын кем биләйәсәге 21 ноябрҙә Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының отчет-һайлау йыйылышында билдәле була.

✓ Башҡортостанда 11 октябрь ял иткән байрам көнө булып тора. 11 октябрҙә Республика көнө билдәләнә. 2018 йылда был байрам кесаҙнаға тура килә. 10 октябрҙә эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Рәсәй Федерацияһы Хеҙмәт кодексының 120-се статьяһы нигеҙендә йыллыҡ төп йәки өҫтәмә түләүле отпуск бирелгәндә 11 октябрҙәге байрам - Республика көнө отпускының календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

***✓ Һандар күрһәтеүенсә, республиканың баш ҡалаһы халҡы 9 йыл эсендә 99378 кешегә артҡан һәм йыл башына 1 131 429 кеше тәшкил иткән. Халыҡтың йәш структураһы ла үҙгәрештәр кисергән.***

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# КЕМДЕР КИЛӘ. КЕМДЕР КИТӘ.

**27 сентябрҙә ҡала Советы депутаттары ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың вәкәләттәрен ваҡытынан алда бушатыу тураһындағы ғаризаһын ҡәнәғәтләндерҙе. Ирек Ишмөхәмәт улы 9 сентябрҙә үткән БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға депутат булып һайланыуы һәм "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһенең төбәк бүлексәһе уны Башҡортостандан Федерация Советына сенатор итеп тәҡдим итеүе сәбәпле, ҡануниәткә ярашлы, вазифаһынан бушатылды.**

Өфө ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов Ирек Ишмөхәмәт улының эшмәкәрлеге осорондағы ҡаҙаныштарын баһалап, уға ҡала Советының Маҡтау ҡағыҙын һәм иҫтәлекле бүләк тапшырып, уның Башҡортостан парламентының ғына түгел, тотош республика халҡының мәнфәғәттәрен лайыҡлы күрһәтеренә ышаныс белдереп, уңыштар теләне. Уның да билдәләүенсә, Ирек Ялалов ҡала хакимиәте башлығы булып эшләгән йылдарҙа Өфөнөң инфраструктураһы һан һәм сифат яғынан үҫеш кисерҙе, социаль-иҡтисади күрһәткестәр ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, заманса йәмәғәт киңлектәре барлыҡҡа килде. Иң мөһиме, баш ҡала федераль кимәлдә танылды.

Ултырышта ҡатнашыусы Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Евгений Маврин да һуңғы ете йылда баш ҡалалағы үҙгәрештәрҙе ыңғай баһалап, Ирек Ишмөхәмәт улына иҫтәлекле бүләк тапшырҙы. 27 сентябрҙән Өфө ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыу ҡала хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйеновҡа йөкмәтелде һәм мэр вазифаһына конкурс иғлан ителде, конкурс комиссияһы билдәләнде. Октябрь һуңында яңы хакимиәт башлығы тәғәйенләнәсәк.

Шулай уҡ ултырышта БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға депутат булып һайланыуы һәм парламентта ЛДПР фирҡәһе фракцияһы етәксеһе итеп тәғәйенләнеүе сәбәпле, Вячеслав Рябов та ҡала Советы депутаты вазифаһынан бушатылды. Ҡала Советының Совет регламентын, депутат статусын һәм этикаһын үтәү буйынса даими комиссия рәйесе Андрей Борисов БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға ҡала Советының закондар сығарыу инициативаһын күрһәтеүсе вәкил итеп билдәләнде.

Ултырышта депутаттар баш ҡаланың яңы урамдарының, бульвар һәм скверҙарының исемдәрен раҫланы. Октябрь районында Сергей Михалевтың исеме мәңгеләштереләсәк. Спорт һарайы эргәһендә "Салауат Юлаев" хоккей командаһын 2008 йылда беренсе тапҡыр Рәсәй чемпионы кимәленә сығарған легендар тренер хөрмәтенә аталған сквер барлыҡҡа киләсәк. Шулай уҡ Ленин районында Урицкий урамындағы трамвай ҡулсаһында урынлашҡан сквер Зоя Космодемьянская исемен йөрөтәсәк. Киров районында - Назар Нәжми бульвары, Булат Имашев, Марина Цветаева, Просвещение һәм Солнечногорск урамдары, Ленин районында - Башҡортостан парламентының элекке депутаты, афған һуғышы ветераны Дмитрий Купцов урамы барлыҡҡа киләсәк.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ошо арала өшөнөгөҙмө? Тиҙҙән һыуыҡ урамда ғына ҡаршы аласаҡ, сөнки баш ҡалала 28 сентябрҙән йылытыу миҙгеле башланды. Был хаҡта сираттағы оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Салауат Хөсәйенов белдерҙе. "Йылылыҡты ебәреү-көйләү ваҡыты өс тәүлеккә тиклем һуҙылыуы мөмкин, шуға күрә ҡайһы бер урындарға йылы шунда уҡ барып етмәүе лә ихтимал, - тине ул йыйылыусылар араһында сығыш яһап. - Шуға күрә был хаҡта халыҡҡа аңлатыу зарур".**

# ЙЫЛЫНАБЫҘ...

Шулай уҡ Салауат Сәхи улы ҡыштың да тиҙҙән ишек ҡағасағын билдәләп, коммуналь хеҙмәттәр ҡарамағында булған техниканың ҡар таҙартыуға әҙер булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шул уҡ ваҡытта ҡар ташыу полигондарын әҙерләү, ҡар күпләп яуған осраҡта предприятиеларҙан өҫтәмә техника йәлеп итеү буйынса килешеүҙәрҙе яңыртыу, һәр районда ҡар таҙартыу техникаһы барлығын-юҡлығын асыҡлау, таҙартыла торған территория сиктәрен билдәләү бурысын ҡуйҙы. "Хужалыҡ итеүҙең ниндәй формаһы булыуға ҡарамаҫтан, һәр территорияның хужаһы булырға, улар уны хеҙмәтләндерергә, техникалары бармы-юҡмы икәнлеге, күпме хеҙмәткәр булыуы бөгөн үк асыҡланырға тейеш", - тип белдерҙе ул.

Оператив кәңәшмәлә ҡала округындағы демография процестары тураһындағы мәсьәлә лә төп урынды биләне. Был мәсьәлә буйынса Өфө ҡалаһының дәүләт статистика бүлеге етәксеһе Оксана Даянова сығыш яһаны. Һандар күрһәтеүенсә, республиканың баш ҡалаһы халҡы 9 йыл эсендә 99378 кешегә артҡан һәм йыл башына 1 131 429 кеше тәшкил иткән. Халыҡтың йәш структураһы ла үҙгәрештәр кисергән. "Һуңғы йылдарҙа эшкә яраҡлы йәштән олораҡ халыҡ өлөшөнөң даими тотороҡло артыуы асыҡ күренә, - ти Оксана Алексеевна. - 1998 йылда был күрһәткес 16,3 процент булһа, былтыр 21,8 процент тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта эшкә яраҡлы халыҡ өлөшө элекке кимәлдә ҡала. 15 йыл дауамында тыуған балалар һәм тыуыу коэффициенты тотороҡло үҫешә. 2016 йылда 18137 бала тыуа. Былтыр донъяға килгән балаларҙың 15,4 проценты - никахы теркәлмәгән ғаиләләрҙә тыуған. 2000 йылда был күрһәткес 25,2 процент тәшкил иткән. Һуңғы 15 йылда теркәлгән никахтар һаны артып, 9681-гә етһә, ошо осорҙа айырылышыусылар һаны 2,8 процентҡа кәмегән. Айырылышыуҙарҙың иң күп өлөшө - 26,7 процент, 5-9 йыл йәшәгән ғаиләләргә тура килһә, 2-4 йыл йәшәүселәрҙең 25,4 проценты айырылышҡан, 10-14 йыл бергә йәшәүселәргә - 13,4 процент, 15-19 - 7,7 процент, 20 һәм унан күберәк - 13,3 процент тура килә.

Өфөлә ҡатын-ҡыҙҙар күберәк һәм был айырма йылдан-йыл үҫә бара. Мәҫәлән, 2002 йылда 1000 ир-атҡа 1188 ҡатын-ҡыҙ тура килһә, былтыр был һан 1229 булған. 1979 йылда баш ҡалала эшкә яраҡлы 1000 кешегә 500 эшкә яраҡһыҙ кеше тура килһә, 2017 йылда был һан 683 булған, шуларҙың 367-һе - өлкән йәштәгеләр, күпселеге - ҡатын-ҡыҙ. Өфөлә, былтырғы мәғлүмәттәр буйынса, ғүмер оҙайлығы 73 йәш. Ир-ат һуңғы йылдарҙа 3,7 йылға, ҡатын-ҡыҙ 2,7 йылға оҙағыраҡ йәшәй башлаған. Шулай уҡ үлем күрһәткестәре лә кәмеүгә табан бара - 2000 йылда был күрһәткес 1000 кешегә 12,3 булһа, былтыр - 10,8. Эшкә яраҡлылар иҫәбенән 2000 йылда 3833 кеше (һәр өсөнсө) үлһә, былтыр - һәр дүртенсе. Бында шуға иғтибар итергә кәрәк: эшкә яраҡлы йәштә үлгән граждандарҙың 70 процентын ир-ат тәшкил итә".

Оксана Алексеевна билдәләп китеүенсә, халыҡ иҫәбенә, шулай уҡ уның сифатына миграция процестары һиҙелерлек йоғонто яһай. Башҡа урындар менән сағыштырғанда, йәшәү кимәле яҡшыраҡ булған муниципаль берәмектәргә мигранттар күпләп ағыла. 2008 йылдан 2017 йылға тиклем Өфөгә Рәсәй төбәктәренән һәм республика районадарынан 177 257 кеше килһә, 145643 кеше киткән. Миграция үҫеше 31614 кеше тәшкил итә. Алыҫ сит илдәрҙән 4076 кеше килһә, 2446-һы кире ҡайтҡан. Мигранттарҙың төп өлөшөн 15-24 йәшлек эшкә яраҡлы контингент тәшкил итә.

Демографияға йоғонто яһаусы факторҙарҙың күп булыуын билдәләп, Салауат Сәхи улы һаулыҡ һаҡлауҙың сифатлы булырға, балалар баҡсалары, уларҙа яҡшы шарттар, мәктәптәр етерлек күләмдә булырға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Эшселәрҙең производствола һәләк булыуына әсенеү белдерҙе. "Ҡала ылыҡтырырлыҡ, йәшәү өсөн уңайлы булһын тиһәк, барлыҡ эшмәкәрлек йүнәлештәре буйынса ла хәл-торошто яҡшыртыу өсөн эшләргә кәрәк", - тип һығымта яһаны Салауат Сәхи улы.

Өфө ҡалаһында төҙөкләндереү эштәре ни тиклем күберәк атҡарыла, вандалдар ҙа шул тиклем әүҙемләшә. Шуға ла оператив кәңәшмәлә икенсе төп мәсьәлә булып баш ҡалала вандализмға юл ҡуймау буйынса ниндәй саралар тормошҡа ашырылыуы тураһында Рәсәй Эске эштәр министрлығының Башҡортостан буйынса идаралығының полиция начальнигы-етәксе урынбаҫары Илгиз Байсурин сығыш яһаны. Был тема, моғайын да, үҙәккә үткән темаларҙың береһелер, сөнки, Салауат Сәхи улы әйтеүенсә, бер үк объектты тергеҙеүгә ҡабат-ҡабат урап ҡайтырға тура килә. Был инде ҡала бюджетына өҫтәмә көсөргәнеш тигән һүҙ, сөнки бер объект өсөн сығым күләме арта. "Киләһе оперативкала торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәте вәкилен тыңларбыҙ. Шуға тиклем килтерелгән зыян күләмен иҫәпләгеҙ, зыян эшләүселәр яуаплылыҡҡа тартылырғанмы? Иң мөһиме, ҡулдары менән эшләгәнде индәре менән күтәрһендәр - зыян күләме үҙ иҫәптәренә ҡаплатылһын.

Кәңәшмә башында күтәрелгән йылытыу миҙгеле темаһына ҡабат урап ҡайтҡанда, хеҙмәт күрһәтеү - бер мәсьәлә булһа, икенсе төп проблема - ресурс менән ҡулланыусылар, идара итеүсе компаниялар һәм ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмалар араһында барлыҡҡа килгән бурыс. Һуңғы ике ойошма араһында был сумма 28 сентябргә 4 миллиард 357 миллион һум тәшкил итһә, ҡулланыусылар менән идара итеүсе компаниялар араһында йыйылған бурыс 1 миллиард 624 миллион һумға барып еткән (сентябрҙә был һан 1 млрд 474 млн һум булған). "Беҙ яңы йылытыу миҙгелен башланыҡ. Тиҙ арала бурыслыларҙы асыҡлап, ҡануниәт сиктәрендә уларҙың бурысын түләтеү эшен башларға кәрәк. Хатта кем күршеһе иҫәбенә йәшәгәнлеген күрһәтеп, исем-шәрифтәрен дә яҙырға мөмкин. Башҡа сара юҡ", - тип талапты ҡәтғи ҡуйҙы Салауат Хөсәйенов. Ғәмәлдә, ул хаҡлы ла, сөнки кемдер ҡулланған хеҙмәттәр өсөн түләмәй, һөҙөмтәлә финанстар етмәү сәбәпле, ниндәйҙер мөһим ремонт эше тулыһынса башҡарылмай. Был инде йылытыу миҙгеленә әҙерлектең сифатына ла йоғонто яһауы мөмкин. Һәр хәлдә, уйланырға урын бар.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә "Башҡортостан гүзәле" матурлыҡ һәм йолалар республика конкурсына кастинг уҙғарыла. Конкурста 16-нан 30 йәшкәсә кейәүгә сыҡмаған һылыуҙар, кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнаша ала. Кастинг 14 октябрҙә киске сәғәт 8-ҙә ойошторола. Адресы: Яңы күпер урамы, 4а, 2-се ҡат. Финал "Башҡортостан" дәүләт концерт залында 6 ноябргә билдәләнгән. Бәйләнеш өсөн телефон: 8-937-169-14-84.

✓Башҡортостанда 796 меңдән ашыу оло кеше йәшәй. Улар - 60 йәшлектәр һәм унан өлкәндәр. Шуларҙың 543 меңе - 60-74 йәшлектәр, 238 меңе - 75-89 йәшлектәр һәм 15 мең кеше - оҙаҡ йәшәүселәр (90 йәш һәм өлкәнерәк). Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы классификацияһына ярашлы, 60-74 йәшлектәр - ололар, 75-89 йәшлектәр - ҡарттар, 90 йәштәгеләр һәм унан өлкәнерәктәр - оҙон ғүмерлеләр.

✓Рәсәйҙә 1 октябрҙә армияға көҙгө саҡырылыш башланды. Быйылғы яҙғы саҡырылыш кампанияһына 128 мең кеше саҡырылды, тип хәбәр итә ТАСС. Яҙғы саҡырылышта Ҡораллы Көстәр рәтен Башҡортостандан бөтәһе биш меңдән ашыу кеше тулыландырҙы.

✓"Рәсәй Федерацияһында эске һәм тышҡы туризмды үҫтереү" программаһы сиктәрендә федераль бюджет "Бөрйән" туристик-рекреацион кластеры үҫешенә 200 миллион һум аҡса күсерә. Республика ҡаҙнаһы проектты 25 миллион һум күләмендә берлектә финанслай. Был аҡса 2021 йылда күсә һәм инә торған юлдар, электр линиялары, һыу һәм газ үткәргестәр төҙөүгә йүнәлтелә. "Бөрйән" кластеры Бөрйән, Күгәрсен, Көйөргәҙе райондары биләмәһен үҙ эсенә ала. Төп туристик объект - таш быуатта ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәре менән Шүлгәнташ мәмерйәһе.

✓"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле ижади миҙгелде премьера менән аса. Коллектив 12 октябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайы сәхнәһендә тамашасылар хөкөмөнә "Башҡорт балы" вокаль-хореография композицияһын тәҡдим итә. Шул уҡ көндә Өфө тамашасыларын "мираҫтар" башҡарыуында тағы ла бер премьера - "Imagine" вокаль тамашаһы көтә. "Мираҫ" артистары Парижда ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында "Донъя бейеүҙәре һәм музыкаһы" фестивален асыу тантанаһында ла тап уны башҡарҙы.

*АФАРИН!*

# КҮМӘКЛӘП...

## хәлде яйлап булыр, тиҙәр



**Ошо көндәрҙә БР Мәғарифты үҫтереү институтында "Башҡортостан Республикаһының башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһын булдырыу буйынса кәңәшмә уҙғарылды. Унда яңы ойошманың эш йүнәлештәрен, маҡсаттарын күҙаллау өсөн республиканың төрлө төбәктәренән 120-ләп педагог ҡатнашты.**

Мәктәптә туған телдәрҙә уҡытыуға ҡағылышлы һуңғы осорҙағы үҙгәрештәр күптәрҙе һиҫкәндерҙе. Башҡортостанда башҡорт телен һәм башҡа туған телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһендә төрлө кимәлдә ыңғай ҡарарҙар ҡабул ителде. БР Мәғариф министрлығы килтергән 2018 йылдың сентябренә ҡараған мәғлүмәттәргә күҙ һалғанда, республиканың дөйөм белем биреү учреждениеларында 11 туған тел өйрәнелә, шул иҫәптән туған урыҫ теле лә бар. Уҡыусыларҙың 97,4 проценты үҙенең туған телен өйрәнә, шуларҙың 63,2 проценты урыҫ телен туған тел булараҡ уҡый. Башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәр 22 процент тәшкил итә, 9,9 процент - татар, 1,04 - мари, 0,86 - сыуаш, 0,21 удмурт телдәрен өйрәнә. Былтырғы уҡыу йылы менән сағыштырғанда урыҫ теленән тыш, башҡа туған телдә белем алған һәм өйрәнгән уҡыусылар һаны 1,9 процентҡа кәмегән. 2018-2019 уҡыу йылында 316 096 уҡыусы башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙе һайлаған, ә былтырғы уҡыу йылында улар һаны 316 560 булған.

Милли мәғариф өлкәһендә күрһәткестәрҙең был рәүешле түбәнәйеүе ошо өлкәлә хәл ителәһе мәсьәләләрҙең күп булыуына ишара яһай. Нисә һөйләһәң дә, бер үк балыҡ башы: проблема нимәлә икәне күптән билдәле, хәлде төҙәтеүгә йүнәлтелгән эштәр генә һуңлай. Ошондай саҡта республиканың башҡорт һәм башҡа туған телдәрҙә уҡытҡан мәктәп һәм балалар баҡсалары педагогтары берләшергә ниәт итеүе уғата ҡыуанысл. "Башҡортостан Республикаһының башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы БР Мәғарифты үҫтереү институты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды һәм инициативалы уҡытыусылар тарафынан ойошторолдо. Ассоциация булдырыуға арналған кәңәшмәлә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сектор мөдире Рәйсә Күзбәкова, БР Мәғариф министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Луиза Сәмситова ҡатнашты.

Шулай итеп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын, республикалағы башҡа туған телдәр уҡытыусыларын бергә туплап, уртаҡ мәсьәләләрҙе күмәкләп хәл итеүгә булышлыҡ итәсәк яңы ойошманың рәйесе итеп БР Мәғарифты үҫтереү институты доценты, филология фәндәре кандидаты Фәнзил Санъяров һайланды, урынбаҫарҙары итеп Ишембай ҡалаһы Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы Рифат Әйүпов һәм Өфө ҡалаһы 65-се Татар гимназияһы директоры Анфиса Ғәлимйәнова тәғәйенләнде. Ассоциацияла башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, урыҫ туған теле уҡытыусылары, туған тел уҡытыусылары (урыҫ теленән тыш), колледж һәм юғары уҡыу йорттарының башҡорт теле уҡытыусылары, туған телдә белем биргән мәғариф учреждениелары етәкселәре, туған телдә белем биргән һәм туған телен өйрәткән мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары педагогтары алты методик берләшмәгә ойошасаҡ. Әлеге ваҡытта БР Мәғарифты үҫтереү институтының сайтында ошо берләшмәләр оставында эшләргә теләүселәрҙе тәҡдим итеү һәм эшкә өлөш индереү мөмкинлеге бар. Шунда уҡ йәмәғәт ойошмаһының уставы менән дә танышырға була. Иң мөһиме, "Күмәкләгән яу ҡайтарған", тигән һүҙҙәрҙе иҫендә тотоп, республиканың туған тел уҡытыусылары битараф ҡалмаһын ине.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*БАЙРАМ САРАЛАРЫ*

# БӨРЙӘНДӘР КИЛДЕ

**Өфөлә Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арналған муниципаль берәмектәрҙең "Башҡортостан тарихы биттәре" марафоны дауам итә. 2 октябрҙә Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Бөрйән районы сығыш яһаны. Байрам сиктәрендә филармония алдындағы майҙанда бал йәрминкәһе ойошторолдо. Ойошмалар, предприятиелар һәм учреждениеларҙың, шулай уҡ халыҡ кәсепселәренең күргәҙмәләре ҡуйылды. Программа район коллективтары һәм урындағы һәүәҫкәр артистар ҡатнашлығында ҙур концерт менән тамамланды. Түбәндә - байрамдан күренештәр:**









# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баш ауыртыуы

❖ Баш мейеһе ҡан тамырҙары ҡыҫылыуы һөҙөмтәһендә баш ауыртыуынан: 10 г арыҫлан ҡойроғо үләне, 5-әр г аҡ сәскә, кейәү үләнен эмаль һауытҡа һалып, 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойорға, талғын утта 10-12 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 100-әр мл эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. 20 көн ял иткәндән һуң, тағы 1 курс ҡабатларға. Ярты йыл ошолай дауаланырға кәрәк.

### Бүҫер

❖ Кендек йәки сандыр өлөшө бүҫере мәлендә бүҫерҙе һалҡын һыу менән йыуырға ла, ярты сәғәткә имән ҡайырыһы төнәтмәһенә манылған сепрәк һалырға. Төнәтмә йылы булһын. Ул шулай әҙерләнә: 1 ҡалаҡ имән ҡайырыһын 15 минут 1 стакан һыуҙа ҡайнатырға. Бынан һуң әсе әрем төнәтмәһенә манылған сепрәкте ярты сәғәткә ҡуябыҙ. 2 ҡалаҡ әремде 1 стакан һыуҙа 15 минут ҡайнатабыҙ. Дауаланыу курсы - 1-2 аҙна.

### Йыйырсыҡтан

❖ Бит тиреһе ҡоро булһа, йыйырсыҡтар ҙа күберәк була. 1/4 стакан балға ошо уҡ күләмдә һөт өҫтәп, 1 ҡалаҡ зәйтүн майы, бер нисә тамсы эфир майы (үҙегеҙгә оҡшаған) ҡушып, бал ирегәнсе талғын утта тоторға. Һыуынғас, бит тиреһенә һөртөргә, 15 минуттан йылы һыу менән йыуырға. Көн һайын эшләргә була. Битлек һыуытҡыста 1 аҙна һаҡлана, ҡулланыр алдынан йылытырға.

❖ Бит тиреһе майлы булһа, түбәндәге битлек килешер. Ярты балғалаҡ балға 2 ҡалаҡ эремсек, 1 йомортҡа өҫтәп, яҡшылап болғарға. 20 минутҡа бит тиреһенә һөртөргә. Йылы һыу менән йыуырға һәм һуңынан тирене боҙ киҫәге менән ышҡырға.

### Киҙеү

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған саған япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут ҡайнап ултырған һыулы һауытта тоторға, һөҙөргә. Көнөнә 4-5 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

## Ерләү йолаһына бәйле тыйыуҙар:

- Мәйет йыуған көндө һыу ташырға, өйгә һыу индерергә ярамай.
- Мәйеттең юлын ҡыймайҙар.
- Мәйетте күмергә алып барғанда ҡатын-ҡыҙ алдан барырға тейеш түгел.
- Мәйетте кәфенгә төргәс, йөҙөн асып ҡарарға ярамай.
- Үлгән кеше алдында сөскөрөргә ярамай.
- Ҡарты үлеп, кәфенләнгәс, ҡатынына йөҙөн асып күрһәтергә ярамай. Ҡатыны үлгәс - ҡартына йөҙөн күрһәтмәйҙәр, тәһәрәте боҙола.
- Өс биҙрә менән һыуға барма - мәйет теләү була.
- Мәйет эргәһендә эт, бесәй булырға тейеш түгел.
- Ләхет таҡтаһын ҡатын-ҡыҙҙан, төпсөк малайҙан эшләтергә ярамай.
- Ләхеткә терәү ағасы ҡуйғанда ҡайын ағасын ҡулланыу тыйыла.
- Терәү һырлы булырға тейеш түгел.
- Ләхет таҡтаһына ерек, ҡайын ағасы бармай - тиҙ серей. Имәндән ҡуйырға кәрәк.
- Зыяратҡа бармаҡ менән төртөп күрһәтмәйҙәр, унда оҙаҡ булырға ла ярамай.
- Зыяратта ҡәберҙәрҙе тапап йөрөү, уларға ултырыу тыйыла.
- Зыяраттың ағасын киҫергә, емеш-еләген ашарға ярамай.
- Ҡәберҙе тимер рәшәткә менән рәшәткәләргә ярамай.
- Зыяраттың кәртәһен алып ҡайтырға ярамай.
- Мәйет күмеп ҡайтыусылар мәйет сыҡҡан өйгә кире инмәй.
- Кер бауында өс бөртөк әйбер элеп торорға тейеш түгел - мәйет теләй.
- Бер яғылған мунсаға ике тапҡыр бармайҙар. Юғиһә, үлгәндә кәфенгә төрәләп һалынғас, нәжескә буялырһың, тиҙәр.
- Кеше үлгәнен ишеткәс, кер, иҙән йыуырға ярамай.
- Мәрхүм тураһында насар уйлау тыйыла.

## Ислам диненә бәйле йолалар:

- Мәсеттең нигеҙ таштарын өй һалғанда нигеҙ итеп ҡулланырға ярамай.
- Атай-әсәйҙе рәнйетергә ярамай. Уларҙың ризалығын алмаған бала бәхетһеҙ була.
- Ашағас, бысраҡ һауыт-һабаны өҫтәлдә оҙаҡ тотмайҙар - ризыҡтарҙы һаҡлап ултырған фәрештәләрҙең ҡанаты тала.
- Бер кешенән дә ҡурҡырға ярамай, Аллаһы Тәғәләнән генә ҡурҡырға кәрәк.
- Берәй кешегә асыуланып өс көндән дә артығыраҡ һөйләшмәй йөрөргә ярамай. Артып китһә - ул кеше мосолман түгел.
- Ваҡытты бушҡа үткәрергә ярамай - гонаһ була.
- Өҫтәнә ҡояш төшкәнсе йоҡлама - бәхеттән буш ҡалаһың.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

АТАЙ-ӘСӘЙҘӘР ҠОЛАҒЫНА



# СИТТӘРГӘ ИШЕК АСМА, ТИБЕҘ,

## ә интернеттағы "сит ишектәрҙән" тыймайбыҙ...

**Бөгөнгө һуҙебеҙ тормошобоҙға дәррәү килеп инеп, ҙур популярлыҡ яулаған интернет хаҡында. Кемдәр нисек файҙалана уның менән? Эйе, мәғлүмәт сараһының был төрө көндәлек тормошобоҙҙа мөһим урын биләй, уның йоғонтоһо, шауҡымы эштә лә, өйҙә лә үҫкәндән-үҫә бара.**

Шулай ҙа заман технологияһының ике яҡлы булыуы ҡыуаныс менән бергә борсолоу ҙа тыуҙыра. Һүҙ ҙә юҡ, интернет мөмкинлегебеҙҙе киңәйтеп, тормошобоҙҙо тамырынан үҙгәртте. Мәҫәлән, элегерәк ниндәйҙер кәрәкле мәғлүмәтте табыу өсөн генә лә сәғәттәр, көндәр буйы китапханаларҙа үткәрергә тура килһә, хәҙер иһә, һаналы ғына минуттар эсендә ниндәйҙер төймәләргә баҫыуың да етә. Тик һәр нәмәлә лә сама булыуын хәтерҙән сығармай, заман технологияһының кире яҡтары булыуын да аңлап файҙалана белеү мөһим, сөнки интернет донъяһын гиҙә торғас, ҡайһы берәүҙәр ҡайҙа виртуаль, ҡайҙа ысын донъя икәнен дә бутай башлай.

Хоҙай тормошта бар нәмәне лә ише менән яралтҡан. Аҡтың - ҡараһы, яҡшылыҡтың яманлығы булған кеүек, интернеттың даыңғай һәм кире яҡтары етерлек. Үкенескә күрә, замандаштарыбыҙ уның ыңғай яғын ғына күреп, кире яғына күҙ һалырға онота. Ә бит дөрөҫ файҙаланмағанда интернет селтәренең кешенең физик сәләмәтлегенә, психик торошона һәм аңына насар йоғонтоһо көслө һәм кире ҡаҡҡыһыҙ. Бындай хәүеф бигерәк тә йәштәргә, балаларға ныҡыраҡ янай.

Нисек кенә булмаһын, күпме генә тырышһа ла, тормош мәшәҡәттәренән арынып, барыһы ла балаларының көндәлек тормошона артыҡ иғтибар биреп еткерә алмай. Ошонан файҙаланып, һәр бала үҙенең буш ваҡытын төрлөсә үткәрә башлай. Берәүҙәре интеллектуаль үҫешкә, тәрбиәгә файҙаһы булмаған тапшырыуҙар ҡарап донъяһын онотһа, икенселәре интернет селтәренә инеп юғала. Белеп эш иткәндә, балаларҙы иртә йәштән интернет донъяһына индереүҙең бер насарлығы ла юҡ, әлбиттә. Әммә был йәһәттән ололар тарафынан етди контроль булыуы мотлаҡ. Интернет аша алған мәғлүмәттәрҙең бала сәләмәтлегенә, психикаһына ҙур зыян килтереүенән һаҡ булырға кәрәк. Бөтә сайттарға ла ирекле инеүҙе тыйыу күп бәләләрҙән һаҡлаясаҡ. Бәләкәй саҡта балаларға ят кешегә ишек асмаҫҡа, ситтәр менән урамда һөйләшеп тормаҫҡа өйрәтәбеҙ. Интернет менән мөғәмәлә иткәндә лә бала күнеленә ошондай тыйыуҙарҙы һалыу атаәсә алдында торған етди бурыс ул.

Балаларҙың интернеттағы төрлө йүнәлештәге мауығыуҙарын тикшереүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтә. Онлайн һорау алыуҙар үткәреү аша 14 йәшкә тиклемге 48 процент баланың ғына тыйылған сайттарға инмәүе асыҡлана. 39 процент бала өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән сайттарға, 19 проценты көсләү күренештәрен күрһәткән сайттарға инеүен таныған. 15 процент бала иһә азарт уйындар сайтында ултырған. Тағы ла ҡурҡынысырағы - 14 процент бала наркотик матдәләр әҙерләү серҙәре һәм алкоголле эсемлектәр менән ҡыҙыҡһынған. 11 процент бала экстремистик, секта, милли мәсьәләләргә ҡағылған сайттарҙа эҙләнгән. Күрһәтелгән һандарҙан сығып фекер йөрөткәндә генә лә үрҙә әйтелгәндәрҙең ни тиклем етди булыуы аңлашылыр.

Ата-әсәләрҙең 63 проценты ғына балаларын нәҡ үҙе контролдә тоторға тырыша. 25 проценты махсус ҡуйылған программаларға ышанып, был йәһәттән әллә ни сикләүҙәр ҡуймай. Ләкин кәрәкмәгән урындарға инеүҙе тыйған программалар, антивирустар ҡуйырыу өсөн күптәрҙең ваҡыты ла, белеме лә, мөмкинлеге лә юҡ. Бары тик 12 процент ҡына балаларҙың иғтибарын йәлеп итмәҫлек итеп, төрлө тыйыуҙар, программалар ҡуйырға белә. Күп осраҡта балалар ата-әсәләрҙән дә белемлерәк булып сыға һәм шуның менән төрлө алымдар ҡулланып, интернеттағы хилафлыҡтарын да оҫта йәшерергә өйрәнә. Нәҡ бына ошондай әүҙем, шуғыраҡ балаларҙың интернеттағы һәр аҙымы ата-әсәләр тарафынан ныҡлы күҙәтеү аҫтына алынырға тейеш тә инде.

Әлбиттә, быныҡ менән ризалашмаусылар ҙа булыр, сөнки ҡайһы бер ата-әсәләр балаларының интернет донъяһында балыҡтай иркен йөҙөүен маһайыбыраҡ та һөйләргә ярата. Баланың ата-әсәһе аңлатып бөтмәгән һорауҙарға яуапты интернет аша үҙаллы таба белеүе насар түгел, тип һанай улар. Һис шикһеҙ, хаҡ һүҙҙәр. Ләкин һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, үҙ мәле булыуын да онотмау мөһим. Мәҫәлән, күп кенә өлкәндәр сабыйҙарҙың нисек тыуыуын балаларға 4-5 йәштә үк өйрәтеүҙе дөрөҫ һанай һәм быны бала менән уртаҡ тел таба белеү, ысынбарлыҡтан сер яһамау тип аңлата. Ә бит элек икәү генә белер серҙәрҙе бер кем дә уртаға һалып, тикшереп, өйрәтеп ултырмаған. Шуға ҡарамаҫтан, һәр ғаиләлә 10-12-шәр бала тәрбиәләнгән. Йәлға буйынан бала эҙләп йөрөүселәр ҙә, йәиһә ҡайҙандыр осоп килер ҡауҙыны көтөп ултырыусылар ҙа булмаған. Ваҡыты етмәйенсә, мейене, аңды кәрәкһеҙ мәғлүмәт менән тултырыуҙың файҙаһы күпме дәрәжәлә булыуы әлегә береһенә лә билдәле түгел. Кеше ғүмере бушҡа ғына балалыҡ, үҫмерлек, йәшлек, ҡартлыҡ этаптарына бүленмәгән. Шуға күрә лә балалыҡ осоро бер ниндәй ҙә проблема сисмәгән, аҙғынлыҡты, дошманлыҡты һүрәтләгән сайттарҙан ары торған ғәмһеҙ осор булып ҡалырға тейештер. Был осраҡта, һәр нәмәнең үҙ мәле булыу менән килешмәйенсә булмай.

Шулай итеп, баланы эскелек, аҙғынлыҡ, енси йүгәнһеҙлек, туң бөгерлелекте ныҡлап сағылдырған төрлө сайттарҙа ултыртыуға ҡарағанда, күнелдә рухи яҡтан байытыусы, эстетик һәм педагогик тәрбиә лә биреүсе нәфис әҙәбиәткә ылыҡтырыуҙың алымдарын ныҡлы ҡулланыу иң отошлоһо буласаҡ. Бындай балаларҙың күңеле саф, тойғолары керһеҙ, хәтер-зиһендәре лә яҡты һәм киң буласаҡ, тип аңлата белгестәр ҙә.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## "КИҪТӘН" ТИГӘНЕ НИ?

Тормош көткәндә кәрәге тейә торған төрлө ҡорамалдар күп ине элек. Бына бүре һуға торған ҡорамалды әсәйем "киҫтән" тип йөрөттө. Аҙаҡтан уны әҙәби әҫәрҙәрҙә лә осратҡаным булды. Һүҙлектә лә киҫтән - йәнлек һуға торған суҡмар тип бирелә. Икенсе төрлө мәғәнәһе лә бар, киҫтән тип ауыр, ҙур нәмәгә лә әйтәләр.

Шулай уҡ һуғыш ваҡытында, унан аҙаҡ та "Һыйырға йурмы кейҙереп ектек" тип һөйләр ине әсәйем. Минең иҫләүемсә, йурмы тип йөрөтөлгән нәмә ағастан дүрткел итеп эшләнгән ҡорolма, шуны һыйырҙың муйынына кейҙереп, ике яҡтан тәртәне шуға нығытаһың. Үгеҙ ҡамытын да "йурмы" тип йөрөтәләр икән.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

## "БАШЫ БАШҠАЛАНҺЫН"

Беҙҙең яҡта ауырлы ҡатынға ҡарата "бәпәйләһен", тип тә, "башы башҡаланһын" тип тә әйтәләр. "Башы башҡаланһын әле, аҙаҡ саҡырып алырбыҙ киләндәрҙе", тиҙәр киләндәренең, ҡыҙҙарының бәпәйләүен көткән туғандары. Бер уйлағанда, ҡыҙыҡ та, шул уҡ ваҡытта уйландырырлыҡ та "башы башҡаланһын" тигән һүҙбәйләнеш. Тик шуныһы: "башы башҡаланһын" тип тыуасаҡ бәпәйгә ҡарата әйтәләрме, әллә буласаҡ әсәгәме? Һәр хәлдә, башы башҡаланһын, тигән һүҙбәйләнештә "бер баштан ике баш булһын", тигән мәғәнә ятыуы бәхәсһеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

*✓ Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡтың битарафлығынан бик оҫта файҙалана ундай бәндәләр. Сит-ят әҙәмдәр беҙҙең ерҙәребеҙҙә үҙҙәрен хәҙер хужаларса тота, улар үҙ биләмәләре тирәһенән урындағы халыҡты ҡыуалай ҙа башланы инде.*



*ИШАРА*

# БАШҠОРТ МӨХТӘРИӘТЕНЕҢ АСЫЛЫ -

## ер хужаһы булыу һәм башҡаларҙың ошо хоҡуҡты таныуы

**(Башы 3-сө биттә).**

Әлбиттә, тиҙ үҫеп һәм нығынып барыусы, әммә бер-береһе менән өҙлөкһөҙ низағ-ҡыйралыш халәтендә көн күреүсе урыҫ кенәздәре яугир башҡорттар тураһында хәбәрҙар булған. Улай ғынамы әле: Ҡара диңгеҙ буйындағы Эске башҡорт иленең тарихҡа билдәле Башҡорт ханы XII быуаттың икенсе яртыһында Ростов-Суздаль кенәзе Юрий Долгорукий, Чернигов кенәздәре Владимир һәм Изяслав Давыдовичтар менән союздаш булып, уларға бөйөк Киев кенәзенә ҡаршы көрәштә ярҙам итә. Урыҫ йылъяҙмаларында Владимир Давыдович яуҙа башын һалғас, уның ҡатынының, дошмандарынан ҡасып, Башҡорт ханға килеүе һәм уға кейәүгә сығыуы ла теркәлеп ҡалған. Монгол-татар яуы замандарында ла башҡорт ерҙәренең яуланып алыныуы йә булмаһа аяуһыҙ ҡырылыуы тураһында мәғлүмәт юҡ. Монгол хандарының башҡорттарҙы үҙҙәренә тиң ҡаһарман һәм ғәҙел ҡәүем сифатында белеп, союздаш итеп алыуы ысынбарлыҡҡа тура килә. Тимәк, Алтын Урҙа составында ла башҡорт үҙ еренә үҙе хужа булып ҡала алған. Шулай булғас, урыҫ батшалығына ла, башҡорттарға яу асып, уларҙы буйһондороу урынына, ике яҡҡа ла файҙалы килешеүҙәр нигеҙендә яңы мөнәсәбәттәр булдырыу өҫтөн булған. XVI быуатта башҡорт ырыуҙары Мәскәү дәүләтен үҙҙәренең сюзерены (етәксе-ҡурсалаусыһы) итеп таныған хәлдә лә, Сыңғыҙ хан заманынан уҡ танылған аҫабалыҡ хоҡуғы менән бергә үҙҙәренең ошоғаса ойошҡан йәшәү һәм үҙ илдәре менән идара итеү рәүешен һаҡлап ҡала алған. Тимәк, башҡорт мөхтәриәтенең асылы - ер хужаһы булыу һәм башҡаларҙың ошо тәбиғи һәм тарихи башҡорт хоҡуғын бер һүҙһеҙ таныуы ул.

Бәлки, 1917-1920 йылдарҙағы иң ҙур юғалтыуыбыҙ ҙа аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙыуыбыҙ булғандыр. Совет власы йылдарында ер дәүләт милке тип иҫәпләнеп, уның төп хужаһы ҡарамағынан тартып алынған хәлдә лә, уны әләф-тәләф итеүгә, ниндәйҙер сит-ят әҙәмдәр ҡулына һатып ебәреүгә юл ҡуйылманы. Ә бына бөгөн хәл башҡасараҡ һәм, әйтергә кәрәк, күпкә хәүефлерәк. Ни өсөн, тиһегеҙме? Сәбәбе бер - хәҙер ер һатыу-алыу объектына әйләнде, һәм ул заман байҙары ҡарамағына күсә бара. Әлбиттә, уларға теләһә ниндәй ташландыҡ ерҙәрҙең бер кәрәге лә юҡ. Ҙур ҡалалар янындағы ерҙәрҙе, күл-йылға буйҙарын, һунар итеп булырлыҡ урмандарҙы көҫәй кеҫәләре ҡалын булғандар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡтың битарафлығынан бик оҫта файҙалана ундай бәндәләр. Сит-ят әҙәмдәр беҙҙең ерҙәребеҙҙә үҙҙәрен хәҙер хужаларса тота, улар үҙ биләмәләре тирәһенән урындағы халыҡты ҡыуалай ҙа башланы инде. "Был күлдә балыҡ тотоу, һыу инеү тыйыла", "Ошо урманға инеү, еләк-емеш йыйыу ҡәтғи тыйыла" кеүек иғландар Башҡортостанда хәҙер һирәк түгел. Артабан да хәлдәр шулай барһа, ерле тип аталған халыҡ ерһеҙ ҡаласаҡ бит!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн ниндәйҙер ерҙәргә хужа булыу өсөн аҡсаң мул булһа, шул етә. Урындағы халыҡтың ризалығын һорап-нитеп тороу ҡайҙа инде ул. Бындай шарттарҙа ерҙәребеҙҙең халҡыбыҙ тормошонда иң мөһим урын биләгәндәренә, бигерәк тә йылға-һыу буйҙарына, дөйөм файҙаланыу өсөн тәғәйенләнгәндәренә, тарих һәм тәбиғәт ҡомартҡыһына тиң булғандарына тейелгеһеҙ булыу статусын биреү фарыз. Әммә иң элек үҙ фекеребеҙҙе етәкселеккә еткереп, ерҙәребеҙҙе теләһә кем ҡарамағына тапшырыуға кәртә ҡуя алмаһаҡ, беҙҙең ғәмәлдән сығарылған суверенитет тураһындағы иҫтәлек тә, үҙаллы халыҡбыҙ, тип күкрәк һуғыуыбыҙ ҙа киләсәк бәләләрҙән ҡотҡара алмаясаҡ.**

**Вәли ИҘРИСОВ.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ҠАЛА АҪТЫНДАҒЫ ҠАЛА

**Академик, археолог, тарих фәндәре докторы, арҙаҡлы Нияз Мәжитовтың 85 йыллығына арналған "Боронғо Өфө" тарихи фестивале баш ҡаланың Аксаков паркында үтте. Сара барышында "Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулыҡ директоры Гәүһәр БАТТАЛОВА менән һөйләштек.**

**➔ Күреүебеҙсә, фестиваль ғәҙәти генә шарттарҙа үтмәне. Сараның ниндәй идеяла, маҡсатта уҙғарылыуы хаҡында гәзит уҡыусыларға ла мәғлүмәт биреп китегеҙ әле?**

- Эйе, фестиваль ғәҙәти түгел. Беҙ уны студенттар өсөн компьютер уйыны формаһында уҙғарырға булдыҡ. Йәғни, тарихи уйын. Башҡорт дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары ике команда булып ярышҡа инә. Улар был мажаралы уйында Өфө буйлап махсус маршрутта хәрәкәт итә һәм археологик һәйкәлдәрҙе табып, заданиелар үтәй. Бик мауыҡтырғыс. Йәштәр шундай яуаплылыҡ менән ҡарайҙар, әҙерлектәре юғары, афарин, тиеүҙән башҡа һүҙ ҙә юҡ.

Фестивалдә ҡаланың алты мәктәп уҡыусылары ла ҡатнашты. Улар ҡала тарихы һәм археологик табыштарға арналған 130 һүрәт эшләп тапшырғайны. Иң матур һәм оригиналь эштәрҙе дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр менән билдәләп киттек.

**➔ Сараның маҡсаты ниндәй?**

- "Өфө ҡаласығы - II" археологик ҡомартҡы миҫалында республикабыҙҙың археологик мираҫын популярлаштырыу маҡсат итеп алынды. Был сара тәүге тапҡыр үткәрелә һәм, белеүегеҙсә, беҙҙең арҙаҡлы тарихсыбыҙ Нияз Абдулхаҡ улының иҫтәлегенә бағышлана.

Бөгөнгө миҫалдар нигеҙендә беҙ йәш быуынға тарихты белеүҙең ниндәй мөмкинлектәр биреүен күрһәтергә теләйбеҙ. Халҡыңдың үткәндәрен өйрәнеүҙең, тыуған ерҙәреңдең, ата-бабалар төйәгенең беҙҙең өсөн аңлайышһыҙ, ят булып ҡалырға тейеш түгеллеген аңлатабыҙ. Был мәғлүмәттәрҙе тарих факультетында уҡығандар ғына түгел, ә барыһы ла белергә тейеш. Кешенең мәҙәнилеген, интеллектуаль кимәлен тап ана шул милләтенең рухи ҡиммәттәрен хөрмәтләүе һәм һаҡлай белеүе күрһәтә.

**➔ Урта быуаттарҙа билдәле булған кәсептәрҙең күргәҙмәһен ҡараныҡ. Быларҙы ойоштороу өсөн оҫталарҙы ҡайҙан алдығыҙ?**

- Күмәк көс менән йыйылды барыһы ла. Тамаша ҡылыусыларҙы һөнәрселек һәм кәсепселек төрҙәре менән мөмкин тиклем киңерәк таныштырырға тырыштыҡ. Боронғо технологиялар менән эш итә белеүсе биҙәүестәр оҫтаһы ла, балсыҡ һауыттарҙы әүәләү, яндырып ҡатырыу серҙәрен күрһәтеүсе лә, уҡ-һаҙаҡ, һөңгө баштарын сүкеүсе тимерселәр ҙә табылды. "1-се Башҡорт полкы - Любизар - Төньяҡ Амурҙары" хәрби-тарихи клубы менән "Легион" клубы вәкилдәре ҡылыс, уҡ-ян, һөңгө кеүек ҡоралдар менән алыш күренештәрен сәхнәләштереп, сараны йәнләндереп ебәрҙе. Ошонда уҡ баш ҡалабыҙға арналған йырҙар ҙа башҡарылды. Шулай итеп, тамашасыны ҡыҙыҡһындырыр бар тарихи байлыҡты күрһәтергә тырыштыҡ.

**➔ Әлеге баш ҡалабыҙ аҫтындағы боронғо ятҡылыҡтар хаҡында онотороға ярамай, шулай бит, был хаҡта ураған һайын һөйләп, яҙып, мәғлүмәттәрҙе яңыртып тороу фарыз...**

- Әлбиттә, быларҙы онотоу һәм "ябып" ҡуйыу милләткә ҡаршы эшләнгән енәйәт кенә буласаҡ. Өфөнөң тарихы мең ярым йылдарҙағы тәрәнлектә. Был һандарҙы унда табылған ҡомартҡылар раҫлай. Ғалимдар Өфөнөң урта быуат йәшәйешен асыусы уникаль майҙансыҡ булыуын иҫбатланы инде. Ленин һәм Киров районы биләмәһендә генә лә биш ҡәлғә, унлап ҡурған-ҡәберлектәр һәм шулай уҡ асыҡ ҡаласыҡтар табылған. Ә иң әреһе һәм федераль кимәлдәгеһе - "Өфө ҡаласығы - II" археологик ҡаҙылмаһы - Өфөнөң тарихи үҙәгендә ята. Уны һаҡлау өсөн 2011 йылда "Боронғо Өфө" республика тарихи-мәҙәни музей асылды ла инде.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

Боласыларҙы хөкөм итеү өсөн Ҡаҙан губернаторы кенәз Голицын етәкселегендә махсус комиссия тәғәйенләнә. Ихтилалда ҡатнашҡандар, ғәйебенә ҡарап, үлем язаһына хөкөм ителә, ҡамсы менән һуҡтырыла, Себергә һөрөлә, һалдатлыҡҡа бирелә, ҡатындары һәм балалары менән ҡоллоҡҡа һатыла. Кирилов әйләнеп ҡайтҡас, боласыларға ҡаршы әүҙем эш алып бара, бер нисә нығытмаға нигеҙ һалдыра, ләкин бер йылдан Һамарҙа үлә. Урынына ҡалған Екатеринбург заводтары начальнигы Татищев уның эшен дауам итә, ләкин бер йылдан Ырымбур комиссияһы идарасыһы генерал-лейтенант, кенәз Урусов менән алыштырыла. Был ваҡытта һаман тыныслана алмаған башҡорттар Юрматы улысы башҡорто Ҡараһаҡалды үҙҙәренең ханы тип иғлан итә. Урусовҡа бындағы боласылыҡты тамырынан юҡ итеү бурысы йөкмәтелә. Һәм ул, ысынлап та, үҙенән алдағы язалаусылар яуызлығынан да арттырып ебәрә: уның етәкселегендә 700 башҡорт ауылы яндырыла һәм туҙҙырыла, 30000 кеше язаға тарттырыла, һөргөнгә ҡыуыла, ҡоллоҡҡа таратыла; бик күп дөйәләре, аттары, башҡа мал-тыуарҙары тартып алына. Ҡыуылған һәм һөрөлгәндәрҙең ерҙәре ситтән килгән килмешәктәргә таратыла. Урусовтың үлеме уның был "эшмәкәрлектәрен" туҡтатып тора. Неплюев хакимлығы (1742-1758) осоронда яңы нығытмалар ҡалҡып сыға, Ырымбур Урал йылғаһы буйындағы әлеге урынына күсерелә, ә башҡорттарға бушлай тоҙ сығарыу тыйыла; бергколлегия тарафынан теләгән кешеләргә Башҡортостанда заводтар төҙөргә рөхсәт бирелә. Шунан һуң бында теләһә ниндәй Твердышевтар, Мясниковтар, Мосоловтар, башҡа сәнәғәтселәр килеп тула. Неплюев осоронда Бөрйән улысында бола ҡуба. Меңәрләгән башҡорт ҡырғыҙ далаларына ҡасып барышлай Йайыҡ аша сыҡҡанда тотола, 1000-гә яҡыны үлтерелә, әсиргә төшкәндәре Рогервикка һөрөлә, ҡатындар һәм балалар нығытмалар помещиктарына ҡоллоҡҡа бирелә.

Ике быуат буйына башҡорттар Иван IV батша тарафынан танылған хоҡуҡтарын даулап көрәшә... Неплюевтан һуң башҡорттар бер аҙ тынып ҡалғандай була, ләкин был тыштан ғына шулай тойола, ә асылда иһә бер ҙә улай булмай. Офоҡта яйлап ҡына болот ҡуйыра...

1763 йылда уҡ әле Спас-Чесноковка ауылына ниндәй юл менәндер император Петр III иҫән икән, тигән хәбәр килеп етә. Өс йылдан, император, ысынлап та, ҡотолоп ҡалған һәм ул Йайыҡта йәшеренеп йәшәй, тигән хәбәр тарала. Тағы бер аҙҙан Чернышев етәкселегендәге хәрби коллегия һәм Ырымбур начальствоһы ҡыҫымына түҙә алмайынса, ҡалмыҡтар күтәрелә. Батша ғәскәре менән алыштан һуң бер нисә мең юрта иҫәбендә ҡалмыҡтар Себер аша Ҡытайға ҡаса. Арттарынан төшһәләр ҙә ҡыуып етә алмайҙар: ҡалмыҡтар китә. Бер аҙҙан, 1772 йылда, Йайыҡ казактары баш күтәрә, һөҙөмтәлә хөкүмәткә тоғро атаман Тамбовцев менән боланы баҫтырыуға ебәрелгән генерал Траубенберг үлтерелә. Болоттар ҡуйырғандан ҡуйыра бара, әйтерһең дә, дауыллы-йәшенле ямғыр яҡынлаша...

**(Дауамы бар).**

*✓ Ҡоролтайҙа иң төп мәсьәлә ерле автономия төҙөү була. Ғәскәр төҙөү тураһында ла һүҙ сыға. Хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙан да бер вәкил була. Рабиға Ҡушаева-Йомағолова халыҡ алдына сығып, гүзәл заттың тиң хоҡуҡтарын яҡлап һүҙ әйтә.*

**Республикабыҙ автономияһының 100 йыллығын билдәләгән ваҡытта нисек тә был дәүер хаҡында күберәк белергә, ҡайһы бер мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерергә, бығаса өйрәнелмәгән өлкәләренә күҙ һалырға тырышабыҙ. Был турала күпме генә һөйләһәк тә, яҙһаҡ та, артыҡ түгел, сөнки был тарихи ваҡиға милләтебеҙ мәртәбәһе, уның яҙмышындағы тарихи һынылыш ҡына түгел, оло ҡаһарманлыҡ та. Ошо юҫыҡта тарихсыларыбыҙ Нил ИШЕМҒОЛОВ һәм Радмир ҒӘЗИЗОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# ТАРИХЫБЫҘ - тормош мәктәбе лә,

**1917 йылға тиклем Рәсәйҙә ниндәйҙер мосолман партияһы йәки ойошмаһы булғанмы? Ни сәбәптән ул заманда билдәле һәм абруйлы булған сауҙагәрҙәрҙән торған татар фракцияһы программаһынан беҙҙекеләрҙең программаһы өҫтөн ҡуйыла?**

**Нил Урал улы:** Революцияға тиклем, яңы ижтимағи хәрәкәт башланғанға ҡәҙәр, башҡорттарҙың бер партияһы ла булмай әле. Ғөмүмән, төрки халыҡтарҙа, әзербайжандарҙан башҡа, бер ниндәй ҙә партиялар ойошмаған була. 1914 йылғы партиялар Төркиәгә ҡарап формалаша башлай, әммә Беренсе донъя һуғышында Төркиә Германия яҡлы булып, Рәсәйҙә уға эйәргән партияларҙың эшмәкәрлеге бөтөнләй тыйыла. Билдәле ихтилалдан һуң илдә дөйөм ижтимағи хәрәкәттәр башлана, был стихияны тотҡарлау мөмкин булмай башлай. Киң йәйелгән хәрәкәттә нисек тә йүгәнләү өсөн Думала Ваҡытлы комитет төҙөлә. Шул Ваҡытлы комитетта мосолман фракцияһы булдырыла. Әлеге хәл башҡорттар өсөн көтөлмәгән ваҡиға була һәм улар был партияға үҙ кешеләрен индереп өлгөрә алмайҙар. Шунлыҡтан, бында заманында Рәсәй кимәлендә билдәле булған бай һәм абруйлы татар сауҙәгәрҙәре, сәйәсмәндәре өҫтөнлөк итә.

Партияның беренсе планы буйынса, Рәсәй кимәлендә мосолмандар съезы иғлан ителә. Милләттәр айырылмай, барыһын бер халыҡ итеп ҡарап, хатта "мосолман милләте" тигән атама уйлап табалар, мосолмандарҙың талабын көн тәртибенә сығаралар. Мосолман сәйәсмәндәренең, сауҙагәрҙәренең Петербургта, Мәскәүҙә, Ҡазанда, Өфөлә үҙҙәренең үҙәктәре була һәм улар өсөн, әлбиттә, айырым республика төҙөү маҡсат итеп ҡуйылмай. Рәсәй бүленмәй торған дәүләт булып ҡалырға тейеш, тип фекер йөрөтөлә һәм мосолмандар өсөн ниндәйҙер икенсе дәүләт күҙ уңында ла тотолмай әле. Башта ошо программа өҫтөнлөк итә. Мосолмандар съезы башланыр алдынан иһә бында ҡатнашырға теләүселәр араһында ике фекер барлыҡҡа килә. Тәүгеһе Шәһри Мәхсуди, Ғаяз Исхаҡиҙар партияһынныҡы була. Уларса, Рәсәй бөтөн, бүленмәҫ ил булырға тейеш, ә мосолмандар өсөн милли-мәҙәни автономия ойоштороу ҙа етә. Йәғни, ойошма мосолман дине һәм мәҙәниәте менән генә шөғөлләнергә тейеш була. Объектив ҡарағанда, был программа тик татар халҡының мәнфәғәттәрен генә ҡайғырта булып сыға. Сөнки башҡа төрки халыҡтар менән сағыштырғанда, был ваҡытта татарҙарҙың күп кенә ҡатламлы буржуазияһы өлгөрөп етә һәм улар башлыса сауҙа, сәнәғәт менән шөғөлләнә. Рәсәй кинлектәрендә улар инде йөгөнтөлө кешеләр, ҡайһылары хатта миллионерҙар була. Әгәр шул уйланған программа тормошҡа ашырылған хәлдә, был уларға бик ҡулай буласағы асыҡлана.

Икенсе программаны Әхмәтзәки Вәлидов иғлан итә. Уның фекеренсә, Рәсәй эсендә һәр бер төрки халҡының үҙ республикаһы булдырылып, улар үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып йәшәргә һәм Рәсәй эсендә федератив төҙөлөш ҡанундары буйынса берләшергә тейеш. Ошондай ике төрлө программа тәҡдим ителә съезға һәм, бәхеткә күрә, уның икенсеһе өҫтөнлөк итә. Ни өсөнмө? Сөнки беҙҙең халыҡҡа хас аҫабалыҡ борондан килә һәм автономия программаһын уйлап табыу ҙа кәрәк булмай. Вәлидовсылар тап ана шул боронғо аҡылға таяна ла инде.

Бөгөнгө сәйәсмәндәр, мәҫәлән, Жириновский тибындағы Рәсәй лидерҙары, рус булмаған милләттәргә автономия биреү большевиктарҙың ҙур хатаһы булды, тип яҙа, сығыш яһай. Ә асылда был берәүҙең дә хатаһы түгел, ә большевиктар партияһының сараһыҙҙан башҡорттарҙың талабын үтәүе була. Ҡыҫҡаса әйткәндә, бына шулай.

**Был мәл, йәғни беҙҙекеләрҙең автономияға ынтылыуы революцияға дәүере менән осраҡлы тап киләме, әллә был уйланылған, әҙерлекле эшме шулай ҙа? Һәм айырым-асыҡ ҡарап үтәйек әле, бер-бер артлы үткәрелгән Башҡорт ҡоролтайҙары (съездары) ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итә?**

**Нил Урал улы:** Ул заманда рус милләте булмаған халыҡтар Рәсәйҙә 50 проценттан күберәкте тәшкил итеүгә ҡарамаҫтан, революцияға тиклем "төрки халыҡтар өсөн автономия" тигән бер ниндәй программа-фәлән булмай. Әммә уларҙың төрлөһө төрлө үҫеш осорон кисерә, һәр береһенең мәнфәғәттәре лә үҙҙәренсә генә була. Рәсәй кимәлендә ярайһы уҡ үҫеш алған татарҙарҙың да хатта был тәңгәлдә бер ниндәй ҙә төплө генә фекере булмай сыға. Әхмәтзәки Вәлидовтың Беренсе, Икенсе һәм Өсөнсө съездарҙағы Рәсәй төҙөлөшөнөң киләсәген күҙаллаған сығыштары программа нигеҙенә һалына. Йәғни, Вәлидов буйынса, Рәсәй ерле автономиялы дәүләт, һәр бер халыҡ үҙенә бер автономия һәм төрки халыҡтар Рәсәй эсендә айырым бер федерацияны тәшкил итә. Бер һүҙ менән әйткәндә, өс баҫҡыстағы федерация күҙаллана. Былар хаҡында, әйҙәгеҙ, съездарҙа ҡаралған мәсьәләләр миҫалында анлатып китәйек.

1-се Башҡорт ҡоролтайына әҙерлек 1917 йылдың май-июнь айҙарында башлана. Улыстарҙа, өйәҙҙәрҙә йыйылыштар үткәрелә, делегаттар һайлана. Делегаттарҙы альтернатив нигеҙҙә һайлайҙар, йәғни бер ниса делегат күрһәтелеп, улар араһынан йәшерен тауыш менән берәүҙе генә төп сараға ебәрәләр. Демократик юл менән эш итәләр. Архивтарҙа документтар һаҡланған: уларҙан күренеүенсә, һәр төбәктә ойошторолған йыйындарҙа күпселек тауыш йыйған дар делегат итеп теркәлгән. Ҡыҫҡаһы, халыҡ тауышына ҡолаҡ һалғандар.

**Радмир Рәшит улы:** Шул рәүешле июль айында Ырымбурҙа 1-се Башҡорт ҡоролтайы уҙа. Шунда Үҙәк шура (совет) төҙөлә. Рәйес һайлағанда бер аҙ шау-шыу ҙа булып ала. Әхмәтзәки Вәлидов, юрист булыуын иҫәпкә алып, - Юныс Бикбовты, ә Ҡорбанғәлиевтәр төркөмө Ш. Манатовты тәҡдим итә. Төркөстандың эштәренә бәйле булыу сәбәпле, Әхмәтзәки Вәлидов үҙенә был вазифанан баш тартырға тура килеүен дә әйтә яҙмаларында. Һөҙөмтәлә, Үҙәк шура, уны Башҡорт шураһы тип тә атайҙар, рәйесе вазифаһына Шәриф Манатов үтә. Был йыйын ойоштороу съезы була, унда ер, уҡыу-уҡытыу, дин, Каруанһарайҙы ҡайтарыу кеүек мәсьәләләр күтәрелә. Ҡоролтайҙа, һис шикһеҙ, иң төп мәсьәлә ерле автономия төҙөү була. Ғәскәр төҙөү тураһында ла һүҙ сыға. Был йыйында хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙан да бер вәкил була. Рабиға Ҡушаева-Йомағолова халыҡ алдына сығып, гүзәл заттың тиң хоҡуҡтарын яҡлап һүҙ әйтә. Милли хәрәкәттә ҡатнашып, үҙ фекерен белдергән беренсе башҡорт ҡыҙы була ул. "Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына -йөҙ шәхес" исемлегенә тәҡдим ителгәнде, шулар араһында уның булмауы менән өсөн бик ғәжәп тойолдо. Автономияның башында торған шәхестәребеҙҙең береһе бит ул. Муллалар уға ҡаршы булыуын белдерә, әммә ул бирешмәй, әйтергә теләгәнен еренә еткереп ҡуя.

Икенсе ҡоролтайҙы Өфөлә үткәрергә ҡарар итәләр. Ваҡытлы хөкүмәттең ҡарары буйынса, был ваҡытҡа Учредительный съезд йыйылырға тейеш була. Ш. Манатов, Х. Йомағолов, Әхмәтзәки Вәлидов һәм башҡалар, күп тауыш йыйып, сараның делегаттары итеп һайлана. Ваҡиғалар Октябрь революцияһына тиклем бара. Был осорға Үҙәк шураның составы киңәйтелә, башта алты ғына кеше була, һуңынан ул ун дүрткә еткерелә.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Өсөнсө ойоштороу съезы үтә, ул иғлан ителгән автономияны раҫлай һәм етәксе органдар төҙөү тураһында һүҙ алып барыла. Шунда 2-се Фарман раҫлана, Рәсәй федератив дәүләт булырға тейеш, тигән ҡарар ҡабул ителә. Етәксе органдарҙан Кесе ҡоролтай тигән парламент төҙөлә, бөгөнгө Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай кеүек була инде ул. Ә Кесе ҡоролтай үҙ сиратында Беренсе Башҡорт хөкүмәтен төҙөй, рәйесе итеп юғары белемле юрист Юныс Бикбов һайлана. Башҡортостандың ерле мөхтәриәте кантондарға, улыстарға бүленә. 2-се Фарманда былар бөтәһе лә күрһәтелә, әлбиттә, кантондар исемдәре билдәләнмәһә лә, Фарманда улар телгә алына. Әйтәйек, бик күп башҡорттар Өфө тирәһендә йәшәй

бит инде, әммә унда большевиктар хужа булыу сәбәпле, уның эсендәге ҡайһы бер өйәҙҙәр генә атап әйтелә.

**Замандар бик буталышлы осор була. Берәүҙәр - аҡтар яғында, икенселәр ҡыҙылдарҙа йөрөй. Башҡорт хөкүмәте лә ошо ике арала күп иккеләнеүҙәр кисерә. Ә бына халыҡтың, ябай башҡорт милләтенең һайлау хоҡуғы буламы, улар кем яҡлы була?**

**Нил Урал улы:** Бер кем яғында ла түгел, үҙебеҙҙең яҡта. Беҙҙең был талашлы-ыҙғышлы ғәмәлдәрҙә эшебеҙ юҡ, тигән улар. Беҙҙең эш - үҙ мәмләкәтебеҙҙең тыныслығын һаҡлау. Артабан Фарманда ошо хаҡта әйтелә лә һәм унда Башҡорт шураһының рәйесе Ш. Манатов, урынбаҫары Ә.-З. Вәлидов, ағзалары Ф. Дәүләтшин, Х. Әмиров, Ғ. Ғәйетбаев, М. Смаҡов, Ғ. Хәсәнов, И. Мутин, шағир Ш. Бабич Ырымбурҙың Каруанһарайында 1917 йылдың 11 ноябрендә ҡултамғаларын ҡуя. Бында һүҙ нейтралитет хаҡында бара, сөнки Ваҡытлы хөкүмәткә барһалар ҙа, унда ер мәсьәләләре хәл ителмәгән була бит әле. Башҡорт делегацияны, ысынлап та, Ваҡытлы хөкүмәткә мөрәжәғәт итә, әммә бер ниндәй ҙә ыңғай яуап, ҡараш тапмай. Ә большевиктар көсләшеп власҡа килде һәм ергә хоҡуҡты юғалтты, тип, башҡорттар уларҙы ла яҡлап сыҡмай. Лениндың "Ер тураһында декрет"ы башҡорттарҙы аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм итә. Үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ хәл итәбеҙ, тигән принципҡа нигеҙләнеп, Дутов килгәс, 15 ноябрҙә 2-се Фарман иғлан ителә. Унда һүҙ ерле Башҡорт автономияһын төҙөү тураһында бара.

**Радмир Рәшит улы:** Әммә был осорға ла бәхәсле мәсьәләләр була. Ҡайһы бер тарихсылар хатта, Дутовтың штығына таянып, башҡорттар мөхтәриәт иғлан иттеләр, уның менән хеҙмәттәшлек иттеләр, тип яҙған. Әхмәтзәки Вәлидов был ваҡиғаларға ҡарашын асыҡ ҡына яҙып ҡалдырмаған, әммә улар 1917 йылдың 14 июненән башлап сығарған "Башҡорт" гәзитендә үҙҙәренең бөтә ҡарарҙарын баҫа бара. Ана шунда бик ҡыҫҡа ҡына бер мәғлүмәт бар. Шәриф Манатов һәм Әхмәтзәки Вәлидов аҡтар атаманы Дутов менән осрашырға бара. Улар ерле мөхтәриәт хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, "Беҙ, казактар ҙа, автономия юллайбыҙ һәм был ҡарашығыҙҙы хуплайбыҙ", ти атаман. Бына ошонан һуң иғлан ителгән дә инде 2-се Фарман. Ваҡытлы хөкүмәттең вәкиле быға ҡаршы сыға, Мосолман хәрби ревкомы ла кире ҡараште була. Ғ. Шәмиғолов, К. Хәкимов, Б.



***Икенсе программаны Әхмәтзәки Вәлидов иғлан итә. Уның фекеренсә, Рәсәй эсендә һәр бер төрки халҡының үҙ республикаһы булдырылып, улар үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып йәшәргә һәм Рәсәй эсендә федератив төҙөлөш ҡанундары буйынса берләшергә тейеш. Ошондай ике төрлө программа тәҡдим ителә съезға һәм, бәхеткә күрә, уның икенсеһе өҫтөнлөк итә. Ни өсөнмө? Сөнки беҙҙең халыҡҡа хас аҫабалыҡ борондан килә һәм автономия программаһын уйлап табыу ҙа кәрәк булмай. Вәлидовсылар тап ана шул боронғо аҡылға таяна ла инде.***

✓ ***Дәүләт Думаһында башҡорт милләтенән әллә күпме депутат булған, аталы-уллы Сыртлановтар, Сәйфетдинов, Мәтинов һәм башҡалар. Уларҙың һәр береһе башҡорт мәнфәғәтен яҡлап сығыш яһаған.***

# ФӘН ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## аҡыл сығанағы ла булһын



**В. Ленин "Килешеү - ул ҡағыҙ киҫәге, киңерәк ҡарағыҙ", тип яуап бирә. Ошо нәүбәттәге хәлдәр ағымында төрлө сәбәптәр арҡылы бер төркөм Башревком ағзалары илдән сығып китергә мәжбүр була. Илдә ҡалғандарын ҡанһыҙ репрессия йота башлай. Милли хәрәкәттә йөрөгәндәрҙең 99 проценты золом ҡорбанына әүерелә. Хатта милли хәрәкәттә ҡатнашмаған, большевик булып йөрөгән кешеләрҙе лә "вәлидовсы" тип атып бөтөрәләр.**

Нуриманов - автономияға ҡырҡа ҡаршы сыҡҡан кешеләр.

Башҡорттар нейтралитет иғлан итһә лә, ил эсендә төрлө йүнәлештәге бәрелештәр, һуғыш башланғас, уны һаҡлап ҡалыу мөмкин дә булмаҫ ине. Ни өсөн тигәндә, уларҙың үҙ маҡсаты, үҙ талаптары булған. Ошо ваҡиғаларҙан һуң Бөтөн башҡорт ойоштороу съезы уҙғарыу тураһында мәсьәлә ҡуйыла.

**Башҡорт ғәскәренең аҡтар һәм ҡыҙылдар араһындағы бер нисә тапҡыр ҡабатланған "күсеш"ен аңлатыусы факттарҙы ҡарап китәйек әле?**

**Нил Урал улы:** 1918 йылдың май аҙағында илдә Граждандар һуғышы башлана, аҡ чехтар ике яҡлап килтереп бәрә, Силәбе һәм башҡа ҡалалар улар ҡулына төшә. Башҡорт хөкүмәте шунда уҡ Силәбегә күсенеп, чехтар менән бәйләнешкә инә һәм улар менән уртаҡ тел таба. Башҡорт хәрби советы төҙөлә, Әхмәтзәки Вәлидов үҙе етәксеһе була һәм ул милли ғәскәр төҙөү өсөн мобилизация иғлан итә. Башҡорт һалдаттарына тупланыу хаҡында хәбәр ебәрелеү менән, бер-ике ай эсендә генә, ул ике дивизия һәм полктан торған тотош башҡорт аҡ корпусы төҙөп ҡуя. Һамарҙа, Омскиҙа ултырған аҡ хөкүмәт ағзалары башҡорттарҙың тиҙ арала армия ойоштора алыуына хайран ҡала. Һәр ҡайһыһы башҡорттарҙы үҙенә йәлеп итергә теләй. Башҡорт офицерҙары, Благовар районының Үҙәкбаш ауылынан башҡорт генералы Ишбулатов та ғәскәр төҙөү эшенә йәлеп ителә. Был осорҙа башҡорт ғәскәренең үҙ формаһы, байрағы ла ҡабул ителә. Башҡортостандың әлеге әләме һымаҡ була ул, тик аҡ төҫө аҫта урынлашҡан.

Көҙгә тиклем илдә һуғыш бара. 17 ноябрҙә Омскиҙа Колчактың түңкәрелеш ваҡиғалары була һәм ул үҙен Юғары идарасы тип иғлан итә. Ул, Рәсәй берҙәм һәм бүленмәҫ булырға тейеш, тип, милли ғәскәрҙәрҙе таратырға, автономияларҙы тарҡатырға, тигән фарман сығара. Башҡорттар нимә эшләргә белмәй аптырап ҡала. Аҡтар менән дә эш сыҡмаҫы көн кеүек асыҡ була.

1919 йылдың 17 февралендә беҙҙең башҡорт ғәскәрҙәре ниндәйҙер яҡшы үҙгәрештәргә өмөт итеп, ҡыҙылдар яғына сығырға мәжбүр була. Ленин да, башҡорттарҙы ҡаҡмағыҙ, әммә уларҙың ғәскәрҙәрен аҡтарға ҡаршы йүнәлтергә кәрәк, тигән фекерен әйтә. Әхмәтзәки Вәлидов ғәскәрҙе бында ҡалдырыуҙы һорап ҡараһа ла, башҡорт полктарын тотош Рәсәй буйлап таратала һәм Деникинға ҡаршы ебәрәләр, Петроградҡа, Польшаға йүнәлтәләр. Тиҙ арала тупланған башҡорт ғәскәрен Башҡортостанда ҡалдырыуҙан ҡурҡалар, әлбиттә.

Шунан һуң инде һөйләшеүҙәр башлана. Симбирскиҙа (бөгөнгө Ульяновскиҙа) тәүге килешеүгә ҡул ҡуйыла, "Предварительное соглашение" тип атала ул. Һуңғы сиктә киң билдәле Килешеү (Соглашение) төҙөлә. Торараҡ беҙҙең башҡорт делегацияһы Мәскәүгә ебәрелә. Документҡа 1919 йылдың 20 мартында М. Ҡулаев - Башҡорт хөкүмәте, Ә. Бикбауов - башҡорт ғәскәрҙәре, М. Халиҡов Башҡорт шураһы исеменән, Мәскәү яғынан И. Сталин, В. Ульянов (Ленин), М. Владимирский, А. Енукидзе ҡул ҡуялар. Ул төрлөсә атап йөрөтөлә: "Соглашение Российского Рабоче-Крестьянского Правительства с Башкирским Правительством о Советской Автономной Башкирии" тигәне "Известия" гәзитендә 1919 йылдың 23 мартында баҫылып сыға.

**Белеүебеҙсә, Үҙәк Шура 1-се Фарманды ҡабул итә. Фарманда нимәләр хаҡында яҙылған була? Һәм уның, атап ҡына әйткәндә, башҡорт халҡына ярҙамы буламы? Ниндәй мөмкинлектәр йәки хоҡуҡтар бирә был документ башҡортҡа?**

**Нил Урал улы:** Дөйөм башҡорт халҡына, Төбәк шураларына мөрәжәғәт иткән 1-се Фармандың йөкмәткеһе ҡыҫҡасараҡ бына ошолай булған: 1917 йылдың 25 октябрендә Рәсәйҙең Ваҡытлы хөкүмәте большевиктар партияһы тарафынан төшөрөлөү айҡанлы, Рәсәйҙә үҙ-ара һуғыш китте, - тиелә унда. - Большевиктар, Ваҡытлы хөкүмәтте тарҡатып, Петроград, Мәскәү, Ҡаҙан, Харьков, Һарытау, Һамар, Өфө һәм Рәсәйҙең башҡа губерналарын үҙ ҡулдарына алды. Күп илдәр большевиктарҙы танымай. Үҙ-ара һуғыш китә. Рәсәйҙә кем баш, кем хужа булғанын белер хәл ҡалмай. Большевиктар, бөтә ерҙе - крәҫтиәндәргә, тип белдерә. Шуның арҡаһында Башҡортостандағы ерһеҙ халыҡтар менән башҡорттар араһында талаш сығыу ихтималлығы тыуа. Талауҙар, үлтереүҙәр хөкөм һөрә, суд юҡ, яза юҡ. Бигерәк тә былар законға, тәртипкә буйһоноп өйрәнгән башҡорт халҡының ҡанын ҡыҙҙыра. Фронттан ғәскәрҙәр үҙ ихтыярҙары менән ҡайта башлай. Большевиктар быға үҙҙәре юл ҡуя. Дөйөм халыҡ тарафынан танылған бер хөкүмәттең булмауы, Ваҡытлы хөкүмәттең большевиктарға ҡарата йомшаҡлығы менән абруйы төшкән Керенский хөкүмәте лә башҡорттарға йүнле эшләргә ирек бирмәй, өйәҙ һәм улыс идараларын тамам ҡаҡшата. Был хәлдән нисек ҡотолорға? Ере, мөлкәте булған һәр халыҡ өсөн үҙ ҡайғыһын үҙенә хәстәрләү, ерен, малын үҙенә һаҡлау мөһимдер. Башҡортостан да идараны үҙ ҡулына алырға тейеш була. Большевиктар үҙҙәре бөтә милләттәргә, ирек теләһәләр, автономия алырҙар, теләһәләр, Рәсәйҙән бөтөнләй айырылырҙар, ти. Украина, Бессарабия һәм Дағстан мосолмандары үҙаллы йәшәгән бөтә идараларҙы үҙ ҡулына ала башлай. Башҡорт халҡы дөйөм съезда ла: "Мәмләкәттә тәртипһеҙлек китһә, идараны үҙ ҡулыбыҙға алырға", - тип ҡарарҙар сығара. Хәҙер Башҡорт шураһы һис кемгә буйһонмай, Башҡортостанды айырым идара итеү юлына сығарырға тырыша. Өфө, Һамар губерналарында башҡорттар татар һәм урыҫтар менән бергә ултыра. Шуның өсөн ул ерҙәрҙә Башҡортостан автономияһын тиҙ генә иғлан итеп булмаясағы аңлашыла. Ырымбур губернаһындағы башҡорттарҙың фекере асыҡ билдәле, бында автономияны иғлан итергә әҙерлек бара. Шулай Башҡортостан икегә бүленә. Өфө яҡтары большевик ҡулында, Ырымбур яғында казактар большевиктарҙы танымай. Шул сәбәпле, Башҡортостандың һуғыш аҫтында ҡалыуы ихтимал була. Башҡорттар бер-береһе менән һуғышырға тейеш түгел, сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул - башҡорт. 1-се Фарманда бына ошолар яҙылған була.

**Радмир Рәшит улы:** Был документ башҡорт халҡы файҙаһына була, әлбиттә, ул шундай маҡсат менән эшләнә лә. Башревкомдың мөмкинлектәре арта, башҡорт ғәскәре һаҡлап ҡалына, ер мәсьәләһенә әллә ни иғтибар бүленмәһә лә, хоҡуҡтар түбән булмай. Унда шулай уҡ бик үҙенсәлекле ун алтынсы параграф бар: "Члены Башкирского Правительства административных учреждений и общественных организаций не подлежат репрессиям за свою минувшую деятельность",- тип яҙылған.

Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, 20-се йылдарҙағы Граждандар һуғышында аҡтарҙы еңә башлағас, башҡорт ғәскәрҙәренә ихтыяж кәмей, юғала, тиһәң дә була. Уларҙы йайлап тарҡата башлайҙар һәм һуңғы сиктә 1920 йылдың 19 майында ЦИК һәм СНК тарафынан Декрет ҡабул ителә. Ул декрет "О Государственном Устройстве Автономной Советской Башкирской Республики" тип аталған һәм документҡа В.И. Ленин менән М.И. Калинин ҡул ҡуйған. Унда инде республиканың күп кенә вәкәләттәре ҡырҡыла, мөмкинлектәр ҙә юғалтыла. Башревком ағзалары был декретҡа ҡырҡа ҡаршы сығыш яһай, ләкин һуңғы сиктә ул тарҡала.

**Шулай итеп, Килешеү боҙола. Ә ни өсөн уны боҙоуға юл ҡуйыла? Нисек тә һаҡлап ҡалыу мөмкинлектәре булманымы икән, нисек уйлайһығыҙ?**

**Үрҙә әйтелгән 16-сы параграф та үҙен аҡламай булып сыға - күпме кеше һәм башҡорт азатлыҡ хәрәкәте лидерҙары тотош репрессияға дусар ителә….**

**Радмир Рәшит улы:** Башҡорт зыялылары, әлбиттә, был хәл менән килешмәй. Әхмәтзәки Вәлидов та Мәскәүгә мөрәжәғәт итә: "Беҙ һеҙҙең менән килешеү төҙөнөк, уға бер йыл да тулманы, һеҙ уны бөтөнләй кире яҡҡа үҙгәрттегеҙ", - ти. В. Ленин "Килешеү - ул ҡағыҙ киҫәге, киңерәк ҡарағыҙ", тип яуап бирә. Ошо нәүбәттәге хәлдәр ағымында төрлө сәбәптәр арҡылы бер төркөм Башревком ағзалары илдән сығып китергә мәжбүр була. Илдә ҡалғандарын ҡанһыҙ репрессия йота башлай. Милли хәрәкәттә йөрөгәндәрҙең 99 проценты золом ҡорбанына әүерелә. Хатта милли хәрәкәттә ҡатнашмаған, большевик булып йөрөгән кешеләрҙе лә "вәлидовсы" тип атып бөтөрәләр.

Бер заман ваҡиғаһын да бөгөнгө күҙлектән сығып "шулай мөмкин булған" йәки "былай итергә ине" тип фаразлап булмай. Эйе, анализларға, фекерләргә була. Әммә һәр тарихи ваҡиғаның үҙ сәбәптәре, үҙ ағымы һәм үҙ идеялары була. Ә был хәлдә беҙҙең зыялылар хәлдәренән килгән, булдыра алған һәм хатта мөмкин булмағандайҙы ла башҡарған, тип уйлайым.

**Нил Урал улы:** Беҙҙең халыҡ өсөн күп йылдар тарихыбыҙҙың был биттәре ҡараңғылыҡта ҡала килде. Тарихсылар ҙа һуңғы сиккә тиклем тарихи сығанаҡтарҙан, архивтарҙан материалдар алыу хоҡуғына эйә булманы. Ә бит халҡыбыҙҙың данлыҡлы шәхестәре күп була. Дәүләт Думаһында башҡорт милләтенән әллә күпме депутат булған, аталы-уллы Сыртлановтар, Сәйфетдинов, Мәтинов һәм башҡалар. Уларҙың һәр береһе башҡорт мәнфәғәтен яҡлап сығыш яһаған. Сыртланов ул сәйәси ваҡиғаларҙа, әйтәйек, Порт-Артурҙы ҡалдырған өсөн барған судта адвокат булып сығыш яһай. Был бит шәхестең кимәле, йәмғиәттәге юғары статусы хаҡында һөйләй. Әхмәтзәки Вәлидов, уның эшмәкәрлеген юғары баһалап, вафат булмаһа, милли хәрәкәтте етәкләп йөрөр ине, тип яҙа был шәхес хаҡында. Әхмәтзәки Вәлидов үҙе лә бөйөк ғалим ғына түгел, юғары кимәлдәге сәйәси лидер, дипломат та була. Уйлап ҡарағыҙ әле, ай ярым эсендә тотош ғәскәр туплай! Бына ошо күренеш кенә лә башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең демократик дәүләт ҡоролошона, Рәсәйҙең федератив үҫешенә законлы нигеҙ һалыуы хаҡында һөйләй.

**Автономиябыҙҙың 100 йыллығын ҡаршылаған йылда беҙ нимәләргә нығыраҡ иғтибар итергә тейешбеҙ?**

**Нил Урал улы:** 100 йыллыҡҡа ярашлы ла, унан тыш та милли ҡиммәттәребеҙҙең нигеҙе булған тарихты өйрәнергә бурыслыбыҙ. Бөгөн был өлкәлә мөмкинлектәр ҙур. Меңәр йыллыҡ йәшәйешле милләттең тарихы Рәсәй тарихы сиктәрендә генә түгел икәнлеге билгеле. Йәштәргә юл асыҡ, өйрәнһендәр, белһендәр генә. Бынан тыш, шул тарихи хәҡиҡәттәрҙән үрнәк ала, шуларға ҡарап һығымталар яһай, өлгө ала белергә лә кәрәк. Бер тарих та әллә ниндәй яңы нәмә уйлап тапмай ул. Һәр заманда ла халыҡтарҙың мәнфәғәте, ихтыяжы бер. Шунлыҡтан, тарих беҙҙең өсөн фән генә булып ҡалмаһын, ә тормош мәктәбе лә, аҡыл сығанағы ла булһын.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

**✓ Абдрахман бейҙең ҡыҙы бирәү генә икәндә һәр ырыуҙа беләләр. Тоҡан бейҙе үлтергән ҡыҙын бигерәк тә яҡшы иҫләйҙәр. Байырға теләүселәр бында ла табылыр. Хәҙер һиңә һунар итеүселәр аҙ булмаҫ.**



Мостафаны һырмаға урап, сәңгелдәккә һалғайны ғына, ишекте киң асып, Аллағол килеп инде. Уның сәләмләү тауышын таныған малаҡай тыпырсынып тороп, ҡарарға ынтылды.

- Апаны ишеткәс, ятмай инде был бала, - тип көлдө ҡыҙ. Сабыйҙы кире һөйрәп алып, ысҡындырып ебәрергә тура килде. Уныһы, урындыҡ ҡырына тотоноп, ишек төбөндәге һикелә аяҡ кейемен һалып ултырған иргә ҡарай юлланды.

- Кил! Кил, улымды, "һоп" итәм! - өҫкә талпынған һайын сырҡылданы бәпес, ҡоторҙо.

- Атай кәрәк инде һәр балаға ла, - тип көрһөнөп ҡуйҙы был ҡыҙыҡты ҡарап ҡыуанып ултырған Хафиза ла.

Баланы кире һеңлеһенә һоноп, урындыҡҡа үтеп ултырҙы Аллағол. Кесе әсәһе табын теҙмәксе ине лә, ҡул һелтәп кенә туҡтатты. Уның әле был көнгәсә атаһының йәш ҡатыны менән ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәне лә, яҡшылап аралашҡаны ла юҡ ине. Бәләкәйҙән өйрәнгән кеше булһа ла, хатта ҡустылары менән йәндәй күргән һеңлеһенең инәләре булғанда ла, атаһының йәмәғәте итеп тартынды, ара һаҡланы Аллағол. Хафиза иһә уны улдарының ағаһы, иренең баш балаһы итеп тарта, хөрмәт итә ине.

- Байбисә, - был исем менән дә беренсе тапҡыр өндәшеүе уның, аниһә, "бәләкәй әсәй" ти торғайны. - Атайҙың ҡайтырына өмөт юҡ, тере булһа, уны бығаса бер нәмә лә тотмаҫ ине.

Хафиза башын эйеп кенә тыңлап ултыра, килешмәй ҙә, ҡаршы ла төшмәй.

- Ҡышты имен-һау сыҡтыҡ, тиҙҙән йәйләү мәле лә етер. Нимә менән индем... Атай урынын миңә алырға тура килде, ерҙәре лә, малы ла тигәндәй... Йәйләүгә лә уның урынына сыҡмаҡсыбыҙ. Һинең уйыңды белгем килә... Минең ғаилә янында ҡалаһыңмы, әллә берәй улыңдың ауылына күсергә теләйһең микән, тейем?

Хафиза тағы бер аҙ шымып ултырҙы ла, әкрен генә тауыш менән әйтеп ҡуйҙы:

- Атайың бығаса яуға киткәнендә лә, сәфәргә юлланғанда ла, хушлашҡанда, бер ҙә "ҡайтмаһам, ҡайҙалыр күсерһең" тимәгәйне. Был юлы ла әйтмәне. Ғүмер буйы ҡылыс өҫтөндә йөрөп тә, үҙенең ҡайҙандыр ҡайта алмаҫын күҙалламаған, тиһеңме... Шуға, улым, ҡаршы булмаһаң, мин уны ошонда ғына көтәйем. Ҡайтһа ла... ҡайтмаһа ла.

Аллағолдоң был һүҙҙәрҙе ишеткәндән тауышы ҡалтырап китте:

- Рәхмәт, байбисә... Ошолай итереңде белгәйнем. Көтәйек атайҙы бергәләп.

Унан сират Көнбикәгә еттеме, ир кеше уға ла күтәрелеп ҡараны:

- Көнөкәй, үткән йәй һине Туҡан бейгә биргәндә, ололарға ныҡлап ҡаршы тормағаныма үкенәм. Улар дөрөҫ эшләйҙер тип, баш һалғайным. Туҡандың һатлыҡ йәнлеген төшөнмәйерәк ҡалдыҡ, әрәм иттерҙек һине. Үҙемде ғәйепле тоям. Бынан ары, үҙеңдең теләгең булмаһа, бер нәмәгә лә көсләмәм. Һин туғаным ғына түгел, беҙҙең ырыуҙың яугир ҡыҙы ла, егеттәрем рәтенә ҡуям һине.

Ҡыҙҙың күкрәгендә нимәлер сәнсеп ҡуйҙы. "Егеттәрем рәтенә ҡуям", "яугир ҡыҙ"... Ошо һүҙҙәр кәрәкме ни уға? Уның әлеге мәлдә һыу буйына яңғыҙы төшөргә лә ҡурҡҡан иркә ҡатын булғыһы килә. Эйе, ҡасандыр бей ҡыҙы итеп ҡарағандарында ярыла яҙа ине, яугирлығын иҫбатлап бер булды. Хәҙер башҡа, хәҙер барыһы ла башҡа. Ҡай арала ул теләктәре юҡҡа сығып, яңылары яралғандыр?.. Хистәре менән бергәлер, моғайын. Мөхәббәт хистәре менән бергәлер...

Аллағол тағы ла арыуыҡ ҡына байбисә менән һөйләшеп, кәңәшләшеп ултырҙы. Көнбикә Мостафаны бәүетте, ә уйҙары ошо йәнде бар иткән кеше хаҡында булды.

Эй, ваҡыт йылғаһының туҡтамауы! Ул тормоштарҙың нисек барыуына ҡарамай, аға ла аға. Именме ул ерҙә әҙәмдәр, ҡырылышып-һуғышышып яталармы, тыныс ҡына көн итәләрме, әллә яу ҡубамы - уның мәшәҡәте юҡ. Ул ағыуын, көндәргә айҙарҙы, айҙарға йылдарҙы ялғап алып китеүен генә белә. Әҙәмдәр ергә тыуа, йән аҫрамаҡ булып ғүмер һөрә, нимәләрҙер көҫәп ҡан ҡойоша, кемдәрендер яҡлап йәнен бирә, шатлана-көйә, илай-көлә... Шулайтып ваҡыт йылғаһының уларға бирелгән һыуҙары ағып китеп бөткәнен дә һиҙмәй ҡала. Ҡарап ебәрһә - бә-ә-әс! Уға ла китергә мәл икән...

Әле генә ҡалайтып ҡышҡа инәбеҙ тип ҡайғырған халыҡ йәйләүгә сығыуға ҡайнаша ла башланы. Ер асылғас уҡ йәйләү урындарын тергеҙеп, яндырылған ҡаралтыларҙы яңыртып ҡайтҡайнылар, үлән бер аҙ күтәрелеүгә тирмәләр ҡоролоп, малдар ҡыуылып,




ҡарауылдар ҡалҡытылып, йәйләүҙәр ҡабаттан йәшәүгә яраҡлаштырылды. Был мәшәҡәттәр тамамланыуға, ҡатын-ҡыҙ менән бала-саға тейәгән ылауҙар юлға сыҡты. Былтырғы бәләләр онотолмаһа ла, йәйләүгә күсенеү барыһы өсөн дә күңелле осор. Ниһайәт, ирек, иркенлек, хозурлыҡ! Ҡанға һеңгән сәхрә танһыҡлығын, шул танһыҡты ҡандырыу ләззәтен бер нәмә лә алмаштыра ла, бер хәсрәт тә баҫа ла алмай шул.

Ҡышты диңгеҙ ярҙарында ятып үткәргән ҡалған ғәскәр ҙә ҡайтҡас, көткәндәрҙең күңеле лә баҫылып, ырыу башлыҡтарының намыҫтары бер аҙ тыныслыҡ алып, бары донъя эштәренә тотондо. Йәйләүҙәр киңәйтелеп, яңынан-яңы тирмәләр ҡалҡты, улар алдына усаҡтар ҡабыҙылды, никахтар уҡылды, сабыйҙар тыуҙы. Көн дә ҡалҡҡан ҡояш менән бергә торосылар һыйыр һәм бейәләрҙе һауҙы, ҡаҙан ҡайнатты, балаларын баҡты, ирҙәрен тәрбиәләне. Ирҙәр иһә барлыҡтары менән бөтөн ошо бөтөнлөктө һаҡлап, яҡлап торҙо, абруй, төҫ булды.

Мостафаны эйәр башына ултыртып алып, урман-ҡыр гиҙеп ҡайтып ингән Көнбикәне ҡото алынған Хафиза алама хәбәр менән ҡаршыланы:

- Ағаң һиңә ҡырға сыҡмаҫҡа ҡушып китте. Тыңламаһа, һаҡ аҫтына ултыртам, тине. Көтөүселәргә ат бирмәҫкә лә ҡушҡан.

Был яңылыҡ ҡыҙҙы бөтөнләй аптыратты. Әле бер тәртип тә боҙмай ғына йөрөй ине лә һаң.

- Ни өсөн? Әйтмәнеме?

Әсәһе бер аҙ тотлоҡто:

- Әйт-те...

- Йә?! - Көнбикәнең һарыуы ҡайнай башланы. Эй, атаһының ҡыҙы инде үҙе лә.

- Үҙенән ишет. Бар, ул һине көтә.

Алдында ойоп ултырған малайҙы әсәһе ҡулына тапшырып, ҡыҙ урталыҡта ҡанаттарын йәйеп кирелеп ултырған оло тирмәләр яғына китте. Яңы ғына ғәскәр баштарын йыйып һөйләшкәндән ял итергә ултырған Аллағол алдына йәш ҡатыны табын йәйә ине. Бикәсенең эскә һонолған башын күреү менән, ҡатын әйҙәләп ҡулын иҙәне. Ҡыҙ "йәлп" итеп инеп, ҡунаҡланы ла. Унан еңгәһенә бер аҙ аҙыҡ теҙешкәс, ағаһына боролоп ултырҙы:

- Миңә хәҙер ат та бирмәйҙәр икән был йәйләүҙә.

Уның ниндәйҙер бер сәнскеле һүҙ әйтерен белгән Аллағол, күңеле төшөнкө булһа ла, йылмайҙы:

- Шулай бына.

- Кемдән ҡасып ятам?

- Ҡасып ятмайһың, һаҡланаһың. Ҡаҙаҡтар яғындағы шымсылар хәбәр алып килде. Беҙҙең яҡҡа ҡарымтасылар сыҡҡан икән...

Нимәнелер әйтеп бөтмәй ағаһы, быны ҡыҙ ҙа һиҙә:

- Тағы?

- Тағы... Һинең башыңа ҙур мал, алтын-көмөш вәғәҙә иткән, ти, ҡаҙаҡ ханы. Йылҡыны һинең алып киткәнлегеңде белә, тимәк.

Көнбикә, алдына ҡарап, бер аҙ уйланып ултырҙы:

- Ә Айыухандың башына?

- Ундай һүҙ юҡ. Ҡаҙаҡҡа истәк яугирҙары нимәгә? Һинең ҡыҙ бала булып, шундай малды алып китә алыуың зитына тейгән уның. Уйлап ҡараһаң, оят бит. Ғәрлегеңдән ятып үлерлек!

- Улар мине ҡайҙан белә? Ҡаҙаҡтарҙан кем таный мине? Ҡыҙҙар күп...

- Абдрахман бейҙең ҡыҙы берәү генә икәндә һәр ырыуҙа беләләр. Тоҡан бейҙе үлтергән ҡыҙын бигерәк тә яҡшы иҫләйҙәр. Байырға теләүселәр бында ла табылыр. Хәҙер һиңә һунар итеүселәр аҙ булмаҫ. Шунлыҡтан, һылыуым, йәйләүҙән генә түгел, тирмәләр янынан ҡырға атлағаныңды белһәмме?!

- Ағай!

- Бөттө!

- Ағайым... бей... Тирмәлә бикләткәнсе, ҡаҙаҡтарға һат! Исмаһам, алышып үлермен.

- Көнөкәй! Ана-бына яу килә тип көтөп торғанда һин ҡайғы һалма инде миңә, йәме?

Ҡапыл тауышы йомшарған ағаһы йәл дә булып китте ҡыҙға. Һуңғы йыл иңенә төшкән хәсрәттәрҙән үтә лә олпатланып, олоғайып китте. Бигерәк тә игеҙәк уландарын юғалтыу ҡанаттарын ҡырҡты уның. Ҡапыл ошоларҙың барыһын иҫләп, ҡыҙ ҙа ыңғайға ауҙарыуҙы хуп күрҙе:

- Ярар, борсолма. Бәлки, юҡ хәбәрҙер ҙә әле.

Тик хәбәр ысын булып сыҡты. Аҙнаун көн тигәндә йылға түбәнендәге бер йәйләүҙән сапҡын килде. Ҡарауылдар тиҫтәләгән һыбайлылар төркөмөн шәйләп, йәйләүгә етмәҫ борон юҡ итеп өлгөргән. Был яңылыҡ халыҡты тағы ла һағайтты. Ҡарауылдар көсәйтелде, малды бикләп тотоп булмағанлыҡтан, уларға ҡораллы һаҡ эйәртеп ебәрелде. Йәйләүҙәр араһында бәйләнеш саптәре ныҡытылды.

Шундай мәлдәрҙә Айыухан улы артынан килеп төштө. Был хәлдең булырын белеп йөрөһәләр ҙә, Хафиза менән Көнбикә албырғап ҡалды. Ҡуйындарында йылытып ҡына үҫтереп килгән сабыйҙы нисек итеп йолҡоп биреп ебәрмәк кәрәк?

- Кем ҡарар һуң? - тигән булды Хафиза, башҡа ҡаршы төшөр һүҙ тапмағас.

- Ағайымдың балалары араһында йөрөп үҫер. Еңгәләрем, уларҙың ҡыҙҙары бар.

- Бәләкәй бит әле, яңы йәше тулды. Тағы бер ҡыш сыҡһа ни була? - Көнбикә бер Аллағолға, бер Айыуханға ҡарап инәлде.

- Балаға атаһы хужа, - тип кенә өҙә һуҡты бей.

Айыухан ҡаты бәрелмәҫкә тырышты:

- Тағы ла бер йылдан уны алыу ауырыраҡ буласаҡ...

Тик Көнбикә Мостафаны улай еңел генә биреп ебәрә алмай ине, ул алышҡа әҙерләнеп ярһыны:

- Өйлән! Тағы булыр балаларың!

Ҡыҙының бындай әҙәпһеҙлегенән Хафиза, "Аһ" итеп ауыҙын ҡаплап, хатта артҡа тайшанып ҡуйҙы.

Айыухандың күңеле күтәрелде генә:

- Һин дә сыҡ кейәүгә, үҙ балаларыңды ҡараһың.

- Миндә ҡайғың булмаһын! Бирмәйем Мостафаны!

- Икегеҙҙе ҡуша алып китәм улайһа.

- Һин!..

- Көнөкәй! - ағаһының екереүе тыйылырға мәжбүр итте ҡыҙҙы. - Бар үҙеңә!

Енләнеп сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Тирмәһенә атылып килеп инеп, көтөүсе ҡыҙы менән уйнап ултырған Мостафаны күргәс, йәштәренә быуылып, эргәһенә сүгәләне:

- Мостафа... балаҡайым минең...

- Нимә булды, Көнөкәй апай, - үҫмер ҡыҙ ҡурҡып китте.

- Атаһы алырға килгән.

- Бөтөнләйгәме ни?

- Эйе. Ҡалайтырбыҙ инде... - ҡыҙҙар, ҡайғырышып, бер ни аңламай йомшаҡ кейеҙҙәрҙә аунап шаярған балаға ҡарап ҡалды.

Нисек кенә булмаһын, артабанғы хәл-ваҡиғаларға ҡаршы тора алмай ине Көнбикә лә, Хафиза ла. Буҙлап илап йөрөп, баланы юлға йыйындырыуҙан башҡа саралары булманы. Атаһының ҡулында ятһырап тартҡылашҡан Мостафаны йәлләп, Көнбикә ҡарауылға тиклем оҙата бармаҡсы булып, ат эйәрләтте. Исмаһам, йәйләү яңғыратып илап сығып китмәһен, бер аҙ булһа ла ҡосағымда иркәләнеп барһын әле, тип уйланы. Уның эйәр ҡашына күсеп ултырғас, малайҙың донъяһы түңәрәкләнде, ошолай йөрөтөүҙе ярата бит ул. Бәләкәс кенә ҡулдары менән йүгән осон әләктереп тә алып, менгене ҡыуа ла башланы. Ат та тыңлап, юртып китте. Улар артынан һаҡсылары менән Айыухан эйәрҙе.

Йәйләүҙән арыуыҡ китеп, ҙур булмаған йылға ярына еткәс, Айыухан уларҙы йәнәшләне лә теҙгенен тартты:

- Ҡал ошо тәңгәлдә, аръяҡта һеҙҙең ҡарауылдар юҡ.

Көнбикә ҡулдарында бәүелеп йоҡлап килгән баланы ҡалайтырға белмәй ыуаланғансы, атаһы ынтылып тартты ла алды. Ҡапыл ҡуҙғытылған сабый тертләп уянды ла, шарылдап илап, ҡыҙға ынтылды:

- Әзззә-әү! Әзззә-ә!

**(Дауамы бар).**

✓ ***Бейеүсебеҙгә шул кейемде кейҙереп сығарырға тура килде һәм ... бейеүҙең тәьҫирен һөйләп кенә лә аңлатҡыһыҙ булды. Баштағы "боронғо, иҫке нәмә..." тигән борсоулы уйҙарым шундуҡ юҡҡа сыҡты.***



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



**Заманында Урал аръяғы халҡының рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү, ерлек фольклорын, ауыҙ-тел ижадын өйрәнеү һәм пропагандалау маҡсатында асылған Сибай дәүләт филармонияһы, беҙҙең көндәрҙә инде концерт-театр берекмәһе, 25 йыллыҡ юбилейлы ижад миҙгелен аса. Туҡһанынсы йылдарҙың данлы ла, шанлы ла ваҡиғаларының бер иҫтәлеге лә ул был мәҙәниәт усағы. Сирек быуат әҙәм тормошонда әле башланғыс ҡына булһа, концерт-театр берекмәһе өсөн ул оло һынау йылдарын үткән, сәнғәт донъяһында үҙ урынын билдәләгән, барлығын һәм берлеген иҫбатлаған, тамашасы алдында һынау тотҡан, көрәйеп, көсәйеп аяҡҡа баҫҡан йылдар - ваҡыт арауығы. Ошо хаҡта берекмәнең директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат ҠОТОШОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# ХАЛЫҠСАНЛЫҠҠА НИ ЕТӘ!

### Өҫтөнлөк ниҙә?

Бөгөн сәнғәт донъяһында ла, шоу бизнеста ла ҡот оскос конкуренция. Артистарҙың исемшәрифен, концерттарҙың атамаларын, программалар төрләлөгән хәтерләп ҡалыу ҙа, уларҙы күҙәтеп барыу ҙа мөмкин түгел. Был бигерәк тә гастролдәр мәлендә күренә. Ҡалалар, район үҙәктәре, ҙурыраҡ ауыл мәҙәниәт йорттарына сират булып китә. Халыҡты йәлеп итеү, уларҙың иғтибарын яулау өсөн ниндәй генә рекламалар уйлап табылмай! Эйе, рекламалары шәп, ә сығыштары, тәҡдим иткән программалары вәғәҙә иткәндәренә тап киләме һуң? Күп осраҡта тап килмәй ҙә шул. Бары тамашасының аҡсаһын һурыуға ҡоролған шоу ғына булып ҡала. Ә Сибай концерт-театр берекмәһенең өҫтөнлөгө нимәлә? Тамашасыға сифатлы хеҙмәт тәҡдим итеүендә. Беҙ һәр сығышыбыҙҙа халыҡҡа ике сәғәттән ашыулыҡ тулы ҡанлы концерт программалары тәҡдим итәбеҙ. Бында бейеү ансамбле лә, йырсылар ҙа, халыҡ инструменттары, ҡурайсылар ансамблдәре лә, берекмә эсендәге айырым вокаль төркөмдәре лә, театр артистары ла, нәфис һүҙ оҫталары ла эшләй. Ә программалар һәр ваҡыт эстәлекле, фекерле булып, театрлаштырылған тамаша формаһын ала. Бер концерт та махсус сценаристар яҙмаһынан тыш ойошторолмай. Йәғни, һүҙ һәм мәғлүмәт тә мәғәнә менән генә ҡулланыла. Беҙҙең сығыштар күңел асыу, күңел күтәреү сараһы ғына булып ҡалмай, тәү сиратта, тамашасының рухи һәм мәҙәни үҫешен күҙ уңында тотабыҙ. Бер үк ваҡытта тәрбиәүи сара ла, илһам сығанағы ла, шифалы ял биреү урыны ла була алабыҙ.

### Егерме биш йыллыҡ ижад

Кемдәрҙер өсөн ижади коллективтың 25 йыллыҡ юбилейы күп тә кеүек түгелдер. Әйтәйек, йөҙәр йыллыҡ тарихы булған коллективтар өсөн. Әммә егерме биш йыллыҡ ижад ул аҙ түгел, минеңсә. Сирек быуат йәшәп һәм эшләп килгән мәҙәниәт усағы артабан да сафта булырға, кимәл тоторға бурыслы. Бигерәк тә Урал аръяғындағы берҙән-бер ошондай берекмә. Был ваҡыт арауығында ул иң ҙур һынауҙарҙы үткән, сыныҡҡан.

Беҙ халыҡты хеҙмәтләндереү үҙәге. Шул уҡ дауаханалар, пенсия фонды, социаль учреждениелар кеүек үк. Улар халыҡ мәнфәғәтен бер төрлө ҡайғыртһа, беҙ икенсе төрлө ҡайғыртабыҙ. "Йырлап-бейеп йөрөү" тигән генә төшөнсә түгел бында. Кешеләрҙең рухын, рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерәбеҙ беҙ. Был башҡа бөтөн ихтыяждарға ҡарағанда ла мөһимерәк. Шулай итеп, 25 йыллыҡ юбилей ижади коллектив өсөн абруйлы ла, мөһим дә ваҡиға ул. Беҙҙең коллектив был сараны йәшәү көсө, милли мәҙәниәттең бер сағыу өлгөһө юҫығында билдәләйәсәк.

### "Сулпан" балалар театры

"Сулпан" балалар театры республикабыҙҙағы берҙән-бер башҡорт телле балалар театры ине. Ул театр булып асылғанға тиклем дә төрлө формаларҙа эшләп килде. Ҡапыл ғына килеп ҡоро ерҙән бар булмағайны. Уның нигеҙендә шул уҡ халыҡ фольклоры, балалар әҙәбиәте ята.

Мин берекмәбеҙҙең был өлөшөн бар мөмкинлектәр менән һаҡлап алып ҡалыу һәм үҫтереү яҡлы. Балаларыбыҙҙы бәләкәйҙән сәнғәткә ылыҡтыра, сәнғәттең, театрҙың нимә икәнен күрһәтә торған берҙән-бер сарабыҙ ул сулпандар. Киләсәккә ҙур филармониялар, театрҙар өсөн тамашасы тәрбиәләй торған мәктәп. Телде, милли мәҙәниәтте үҫтереүсе, пропагандалаусы һәм быларҙың барыһын да балалар телендә биреүсе берҙән-бер мәҙәни усаҡ ул бөгөн дә. Балалар театры әүҙем ижад өҫтөндә. Берҙәм концерт программаларында, театрлаштырылған тамашаларҙа ҡатнашыуҙан тыш, уларҙың үҙ сығыштары, гастролдәре лә аҙ түгел.

"Сулпан" балалар театрын юҡҡа сығарыу үҙебеҙҙе киләсәктә мәҙәни тамашасынан мәхрүм итеү ул.

### Яңы бина буласаҡ

Өс йыл ағымында яңы бина буйынса ҡағыҙ эштәре атҡарылды һәм, Аллаға шөкөр, ул мәшәҡәттәр артта ҡалып бара. Быйылғы йыл аҙағына тиклем иҫке бина урынын емереклектәрҙән таҙартып ҡуйырға тейешбеҙ. Киләһе йыл башынан шул уҡ урында, элеккенән ике тапҡырға ҙурыраҡ бинаның төҙөлөшө башланасаҡ. План буйынса биш йөҙ урынлыҡ залға өмөт ителә. Сибай концерт-театры берекмәһе коллективы был ауыр осорҙо сабыр ғына кисереп килде. Ныҡлы ғына "йәшәр" урыныбыҙ булмағанда ла концерттарҙы, гастролдәрҙе туҡтатҡаныбыҙ булманы. Был ныҡлыҡ, был патриотлыҡ менән ғорурланырлыҡ. Артистарыбыҙ ҙа, тамашасыларыбыҙ ҙа яңы бинаны ашҡынып көтөп тора. Был йәһәттән Республикабыҙ етәкселегенә оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Бөгөн беҙҙә эш хаҡтары яҡшы, йәштәр килеп тора, ижади төркөмдәр тулы. Кәйефтәр күтәренке, киләсәккә өмөт бар. Сөнки иң беренсе сиратта хеҙмәткәрҙәребеҙҙең социаль һәм матди хәлен яйлауҙы тәртипкә һалғанбыҙ. Кем әйтмешләй, икмәк булһа - йыр ҙа була.

### Йөҙ башҡорт йыры

Егерме биш йыллыҡ юбилей айҡанлы һирәк йырланған йөҙ башҡорт халыҡ йырынан торған диск әҙерләнек. Был йырҙар күпселек ошо төбәктә яралып, беҙҙең көндәргә ниндәйҙер мөғжизәләр аша ғына килеп еткән йырҙар ул. Уларҙың башҡарыусылары ла ошо ерлектә йәшәүсе, эшләүсе вокалистар. Бөгөн эстрада йырсылары күп, ә халыҡ йырын йырларға йөрьәт иткәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Халыҡ йырҙарын башҡарыу өсөн ниндәй һәләт һәм мөмкинлектәр кәрәклеген беләһегеҙ. Тағы ла нимәне билдәләп үтергә теләйем: әлеге йыйынтыҡта йырҙар төп нөсхәһендәгесә, боҙмай, үҙгәртелмәй башҡарыла. Уларҙы дәрес өлгөләре итеп тә, тыңлап өйрәнеү өсөн дә файҙаланырға була. Йомғаҡлап әйткәндә, был йөҙ башҡорт йыры тупланған диск үҙен башҡорт һәм башҡорт ғаиләһе тип иҫәпләгән һәр әҙәмдең өйөндә, машинаһында, эш урынында булырға, ялда-юлда уны ошо илаһи моңдар оҙата йөрөргә тейеш.

### Онотолмаҫ хәтирә

Һуңғы гастролдәрҙән иң иҫтәлеклеһе Ҡаҙағстанда сығыш яһау булғандыр. 2015 йылда Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡалаһында үткән урындағы башҡорт ҡоролтайы йыйынында ҡатнашҡайныҡ инде. Был юлы Астана ҡалаһындағы "Аҡбуҙат" башҡорт ойошмаһы үткәргән йыйында булырға яҙҙы. Ҡасандыр башҡорт ерҙәренән сығып китеп, ҡаҙаҡ далаларында тороп ҡалған милләттәштәребеҙҙең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп ҡайттыҡ. Утыҙар-ҡырҡар йыл тыуған яҡтарын күрмәгән апай-ағайҙар оҙон көйҙәребеҙҙе тыңлап, түгелеп илап ултырҙы. Бик тетрәндергес күренеш булды был. Әйтергә кәрәк, сығыштарҙы ла алдан ентекле уйлап алып барҙыҡ. Ҡаҙаҡ эстрадаһының яҡшы үҫешкән һәм уларҙы замана йырҙары менән аптыратып булмаясаҡ икәнен күҙаллап, тик халыҡ йырҙарын ғына башҡарҙыҡ һәм оттоҡ та. Бигерәк тә ҡурай моңо аҫтында башҡарылғандары әсир итте халыҡты. Концерттан һуң да таралышмай, һәр береһе килеп, нимәләр әйтергә, костюмдарҙы, ҡурайҙы тотҡолап ҡарарға теләп, шул тирәлә өйкөләштө. Бер һүҙ менән әйткәндә, ситтә йәшәгән яҡташтарыбыҙға тыуған моңдарын ишеттереп, ғәзиз ерҙәренең бәләкәй генә бер өлөшөн алып барып күрһәтеп ҡайтҡандай булдыҡ. "Был беҙгә оҙаҡҡа етерлек энергия булды, киләһе йыл да көтәбеҙ", - тип ҡалдылар.

### Башҡорт кейеме

Беҙ бөгөн сағыу эстрада кейемдәренә, халыҡ кейеме өлгөләренә оҡшатып тегелгән сәхнә костюмдарына өйрәнгәнбеҙ. Ә боронғо халыҡ кейеменең нисек икәнен бик һирәктәр генә беләләр. Ошо Ҡаҙағстан сәфәрендә мин был күренешкә шаһит булып, үҙемә бер асыш яһаным. "Оҙонсәс" бейеүен башҡарырға тейеш инек. Ә бейеүҙең сәхнә костюмы онотолоп ҡалған. Бәхеткә күрә, Өфөнән реставратор Илдар Ғатауллин башҡорт кейеме күргәҙмәһен алып барған. Бейеүсебеҙгә шул кейемде кейҙереп сығарырға тура килде һәм ... бейеүҙең тәьҫирен һөйләп кенә лә аңлатҡыһыҙ булды. Баштағы "боронғо, иҫке нәмә..." тигән борсоулы уйҙарым шундуҡ юҡҡа сыҡты. Кейем, шулайтып, бейеүҙең асылын бөтөн тәрәнлеге, боронғолоғо менән асып һалды ла ҡуйҙы.

### Өфөләр беҙҙе көтә

Сибай концерт-театр берекмәһе сығыштарының халыҡсанлығы уның брендына әйләнгән инде. Беҙ хәҙер Өфө тамашасыһын да ошо үҙенсәлек менән әсир иткәнбеҙ. Улар сибайҙарҙың ниндәйҙер бер ихлас, тамалы, эстәлекле программа менән килерен көтөп тора. Һәм беҙ был юлы ла, йәғни 18 октябрҙә (Башҡорт дәүләт филармонияһында) һәр ваҡыттағы кеүек үк, уларҙың өмөтөн аҡлауға бар көсөбөҙҙө һалаҫаҡбыҙ.

Сибай концерт-театр берекмәһенең халыҡсанлығы бер беҙ генә билдәләгән үҙенсәлек түгел. Мәҫәлән, быйыл беҙҙең коллективтың ошо һыҙатын әлшәйҙәр ҙә билдәләп китте. Тап милли рухлы, колоритлы йыр-бейеүҙәребеҙҙе күреү өсөн улар беҙҙе район һабантуйҙарына саҡырғайны. Ә бер йәй эсендә генә лә ошондай саҡырыуҙар әллә нисәү булды!

**Миләүшә ХӘБИЛОВА яҙып алды.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯЛҠАУҘАР КҮБЕРӘК ТҮЛӘЙ

■ Какаоның файҙаһы тураһында һуңғы ваҡытта күп ишетәһегеҙҙер. Диабетты булдырмаусы үҙенсәлеген дә беләһегеҙҙер. Какаола инсулин бүленеп сығыуға ярҙам итеүсе берләшмәләр бар. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, какао - D2 витамины сығанағы. Белгестәр төрлө какао продукттарын анализлаған. D2 витамины бигерәк тә какао майында һәм ҡара шоколадта күп икән. Әммә организмды был витамин менән байытыу өсөн шоколадты күп итеп ашарға кәрәк. Шоколад, билдәле булыуынса, ныҡ майлы һәм шәкәрле продукт. Шуға ла белгестәр какаонан организмда шәкәр кимәлен күтәрмәй торған ризыҡ әҙерләп булмаймы икәнен өйрәнә. Мәҫәлән, тиҙҙән һатыуҙа какаолы макарон килеп сығыуы ихтимал, ти ғалимдар.

■ Йәшелсә, емеш-еләк, сәтләүек һәм балыҡтан торған урта диңгеҙ диетаһы депрессияны булдырмай. Ғалимдар 41 ғилми хеҙмәтте тикшереп, туҡланыу менән психик сәләмәтлек араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Урта диңгеҙ диетаһын тотҡанда депрессия хәүефен 33 процентҡа кәметергә була. Ғалимдар быны шулай аңлата: күптәрҙең рационында шешеүгә килтереүсе матдәләр бар. Мәҫәлән, эшкәртелгән ит ризыҡтарында, транс-майҙарҙа, алкоголдә. Тап улар депрессияға килтереүе бар. Шешеү - ул патоген ҡуҙғытҡысҡа организмдың һаҡланыу-яраҡлашыу реакцияһы. Ә ул диета аша дауалана.

■ Ашҡаҙан-эсәк тракты баш мейеһе менән бәйле, ти ғалимдар. Ашҡаҙан-эсәк трактында нервы күҙәнәктәренең һаны 100 миллионға етә. Уларҙың ҡайһы берҙәре баш мейеһе менән тура-нан-тура бәйләнештә. Элек ашҡаҙан үҙенең туйыуы тураһындағы сигналды баш мейеһенә 10 минут эсендә "ебәрә" тигән фекер йәшәй ине. Хәҙер был бәйләнеш һанаулы ғына секундтар эсендә барлыҡҡа килә, тип иҫәпләргә нигеҙ бар. Ошо уҡ туңдырма ашағанда кешенең кәйефе шунда уҡ күтәрелеүенең сәбәбен дә аңлата. Был тура бәйләнеш организмдағы токсиндарҙы таныуға ла булышлыҡ итә.

■ Ғалимдар аҙ хәрәкәтләнеүҙең иҡтисади эҙемтәләрен баһалап ҡараған һәм байҙар һәм ярлылар араһында бер принципиаль айырма тапҡан. Билдәләнеүенсә, түбән социаль кимәл ялҡаулыҡ менән бәйле, улар шулай уҡ аҙ хәрәкәтләнә лә икән. The Lancet журналы яҙыуынса, ғалимдар 142 илдән йыйылған мәғлүмәттәрҙе анализлаған. Айырыуса аҙ хәрәкәтләнеү һөҙөмтәһендә ҡаҡшаған сәләмәтлекте кире нығытыу өсөн тотонолған сығымдарға иғтибар бирелгән. Халыҡтың түбән физик әүҙемлеге донъя иҡтисадына йылына 67,5 млрд һумға төшә. Йәки һаулыҡты нығытыу өсөн кешеләр ошо күләмдә аҡса тотона. Ғалимдар әйтеүенсә, был минималь һан, ысынында иһә ул тағы ла ҙурыраҡ булыуы ихтимал.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, кеше дөрөҫ туҡлана икән, ҡайһы берҙә татлы эсемлектәр эсеү һәм тәм-том ашау уның сәләмәтлеген ҡаҡшата алмай. Әйткәндәй, шәкәр яман шеш күҙәнәктәрен уята һәм шештәрҙе агрессивҡа әйләндерә. Яман шеш күҙәнәктәре шәкәрҙе тарҡата һәм лактата матдәһен барлыҡҡа килтерә, был шеште үҫтерә. Сәләмәт күҙәнәктәргә ҡарағанда, зарарланған күҙәнәктәр шәкәрҙе күберәк тарҡата. Фән был метаболик аномалияны Варбург тәьҫире тип атай. Яман шеш күҙәнәктәренең шәкәрҙе күпләп "ашауы" шеште аҙҙыра һәм даими туҡландыра. Быны раҫлау өсөн белгестәр бәшмәктәрҙә һынауҙар үткәрә. Бәшмәк күҙәнәктәрендә яман шештәге кеүек уҡ аҡһымдар бар, бары тик улар мутация һөҙөмтәһендә формаһын үҙгәрткән. Етмәһә, бәшмәктәр ҙә шәкәр ярата.

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ҠАР ӨҪТӨНДӘ...

## усаҡ ҡабыҙыр ағинәй ул



**Бөгөнгө әңгәмәбеҙ геройы, үҙе әйтмешләй, "ябай ауыл ҡатыны". Ләкин ул баҫалҡылығына барып, шундай мөһөр һуға үҙенә. Бөгөн, белгегеҙ килһә, ябай ауыл ҡатындары үҙҙәре йәшәгән төбәктәрҙә тотош түңкәрелеш яһар ҡеүәткә эйә. Ағинәйҙәр хәрәкәте республикабыҙҙың рухи тормошона яңы һулыш өҫтәп, иман нуры, ижад ҡомары, матурлыҡ, миллилек өлгөһө булып килеп инде. Хатта ки ҡара урман төпкөлөндә, тауҙар араһында шым ғына көн күреп ятҡан Ишбирҙе ауылын да уятып ебәрҙе уның тулҡыны. Ләкин уяныу - бер эш, ә бына ауылдаштарҙы барлап, туплап, ойоштороп, йырлатып-бейетеүсе генә түгел, әүҙем сәләмәт тормошҡа әйҙәп, рухтарын күтәреп, күңелдәренә уй осҡоно һалып тороусы ла булыр беҙҙең бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы мәктәбенең инглиз теле уҡытыусыһы, ауылдың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Наилә ЮНЫСОВА-ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА.**

➔ **Уҡытыусы Зөбәржәт Абрар ҡыҙы менән рәссам Наил Лоҡман улы Юнысовтар ғаиләһендә ҡалала үҫкән наҙлы, иркә генә бала булһаң да, урман араһында ултырған төпкөл ауылға уҡытырға килеп, аҙаҡ ошонда уҡ тороп ҡалырға нимә мәжбүр итте икән һине, Наилә һылыу?**

- Ишбирҙе атайымдың тыуған ауылы. Әсәйемде, Салауат районы ҡыҙын, педучилище бөтөргәс, ошо ауылға уҡытырға ебәрәләр. Бында улар танышып, яратышып, ғаилә ҡороп ебәрәләр. Мин донъяға килгәнмен. Унан атайым дүрт йыл буйы Өфөлә сәнғәт училищеһында уҡый, әсәйем ауылда эшләй. Рәссам дипломы алғас, атайым Баймаҡҡа эшкә ҡайта һәм беҙҙе район үҙәгенә күсереп алып китә. Миңә, башҡортса ғына һөйләшеп йөрөгән балаға, шулай итеп, Баймаҡта урыҫ мәктәбендә уҡып алып китергә тура килде. Етмәһә, бында мине ауылда 1-се класты тамамлап килеүемә ҡарамаҫтан, ҡайтанан 1-се класҡа ултырттылар, сөнки урыҫса бер һүҙ ҙә белмәй инем. Һөҙөмтәлә, мәктәптә әсәм, өләсәм теленән алыҫлаша башлауымды тойҙом, ләкин был мине туған милли мөхит рухынан, мәҙәниәтемдән айыра алманы, сөнки беҙҙең өйҙә һәр саҡ милли тәрбиә культы һаҡланып ҡалды. Шулай ҙа ул саҡ мин бер ҙә кәмһенеп, баҫылып ҡалманым, киреһенсә, урыҫсаны ла һыу кеүек үҙләштерҙем, мәктәп тормошоноң урталығында ҡайнаным: комсомол секретары булдым, спорт менән шөғөлләндем - өйгә ҡайтып инмәй инем. Күрәһең, лидерлыҡ сифаттары шул саҡта уҡ үҙен һиҙҙергәндер инде.

Мәктәпте тамамлағас, Өфөгә юлландым: был саҡ мин үҙемде Өфө сәнғәт институты студенты итеп күрә инем инде. Атайымдың бер туған һеңлеһе Римма апайым Йәрмөхәмәтова тап ошо институттың актерҙар факультетын тамамлап, театрҙа эшләп йөрөгән сағында мине "Нәркәс" спектакленә алып барғайны. Шунан һуң апайым минең кумирыма әйләнде һәм мин ғүмерлеккә театрға ғашиҡ булдым. Тик хыялым селпәрәмә килде: сәнғәт институтында, быйылға актер факультетына набор юҡ, тип әйтеүҙәренән доньям түңкәрелгәндәй булды. Ни эшләргә? Өйгә шылтыратһам, ҡайҙа булһа ла белемеңде һынап ҡара, тинеләр. Шулай итеп, мин Башҡорт дәүләт педагогия институтының сит телдәр факультетына имтихандарҙы уңышлы тапшырып, уҡырға инеп киттем. Уҡып бөткәс, тыуған яғыма, Баймаҡҡа ҡайттым. Бында инде үҙеңде һынау мөмкинлеге ҙур ине: райондың 12 мәктәбендә сит телдәр уҡытылмай булып сыҡты. Һәр ваҡыттағыса, атайым ҡарар ҡылды. Ул, киттек Ишбирҙегә, тигәс, тыңланым. Ләкин ғүмерлеккә шунда ҡалырмын тип башыма ла килтермәнем. Тыуған ауылымда мине ғүмерлек һөнәр юлы ғына түгел, тормош юлдашым да көтөп торған: ошо ауыл егете Сәлим Иҫәндәүләтов менән өс ай ғына дуҫлашып йөрөп өйләнештек.

➔ **Шуға инанғанмын һәм гел ҡабатлайым: ауылда йәшәү өсөн "елкә" кәрәк. Бигерәк тә Ишбирҙе кеүек юл да, газ да, башҡа социаль инфраструктура тармаҡтары ла үтеп инмәгән төпкөл төбәктә йәшәүҙәре, ай-һай! Бигерәк тә уҡытыусы кеше - ҡатын-ҡыҙға... Хәҙер күп ерҙәрҙә ауылды ташлап китергә мәжбүрҙәр, сөнки эш юҡ, мәктәптәрҙә балалар һаны кәмей.**

- Ауырлыҡтар күп булды. Бигерәк тә ауылға килгән тәүге осорҙарҙа. Дөрөҫөн әйткәндә, улар һаман да кәмемәй шикелле, ә шулай ҙа, шөкөр, бирешкән юҡ. Күрәһең, миндә үҙенә күрә "иммунитет" барлыҡҡа килгәндер хәҙер. Ҡыйын саҡта миңә гел әсәйемдең һүҙҙәре таяныс булды. "Хәл ителмәҫ хәлдәр булмай ул!" тип ҡабатларға ятатты гел. Мал-тыуарын да аҫрайбыҙ, баҡсасылыҡ менән "ауырыу" ҙа икебеҙҙә лә бар. Яңыраҡ ауыл өйөбөҙҙә ҡала фатирындағы кеүек бөтөн уңайлыҡтар булдырҙыҡ. Керҙе автомат йыуа - ожмах! Әйткәндәй, ауылда хәҙер күптәр ана шундай "ожмах"ты булдырып алды. Ауылыбыҙ бөтмәй, шөкөр, йәштәребеҙ атай төйәгендә төпләнә: матур итеп йорттар һалып инә. Буш торғандары ла байтаҡ өйҙәрҙең - ни хәл итәһең: быуындар алышыныуы шунан да күренә. Эшләйем тигән, һеҙ әйтмешләй, "елкәһе" бар кеше эшһеҙ ятмай ул. Урмансылыҡ, ағас эше менән шөғөлләнә күптәр. Урман участкаларын арендаға алған эшҡыуарҙар, пилорамалар ир-егеттәрҙе эш урындары менән тәьмин итә. Күпләп мал аҫраусы ауылдаштар ҙа, ни ашайым, ни кейәйем, тип баш ватмай.

➔ **Наилә һылыу, һинең ғаиләң, туғандарың өсөн өҙөлөп торған киң күңелле ҡатын, әсәй һәм апай икәнлегеңде беләм. Балаларығыҙҙы үҫтереп, ейән-ейәнсәрегеҙҙе ҡарап тороу өҫтөнә ҡустыларыңды ла ҡанат аҫтына алғанһығыҙ. Тимәк, иптәшең Сәлим Мөхтәр улы ла тарһынмай, күңеле киң. Ошо ҙур ғаиләнең башлығы булып, уның өсөн уңайлы һәм имен йәшәү шарттары булдырып, тырышып тора икән, был уның да кешелек сифаттары хаҡында һөйләй, минеңсә.**

- Эйе, бер-береһенең туғандарына ҡарата мөнәсәбәте ир менән ҡатындың кем икәнлектәрен асыҡ күрһәтеп тора, тигәндәрен ишеткәнем булһа ла, ваҡытында был аҡылға иғтибар ителмәгән, ә бына тормош хәлдәре үҙ башыма төшкәс, аңланым ул хәҡиҡәтте. Шөкөр, янымда Сәлимдең иңдәрен тоймаһам, бөгөнгө көнөбөҙҙөң ниндәй булырын күҙ алдына ла килтереүе ауыр. Әсәйем тыумыштан зәғиф Насир ҡустымды ғүмер буйы ҡараны, хатта үҙенең вафаты йылды ла уны шифаханаға алып барҙы. Нисек алып йөрөгәндер атлай алмаған 45 йәшлек ирҙе, үҙе лә сирләп саҡ йөрөнө бит. Әсәйем мәңгелеккә китеп барыр, ҡустым минең ҡулға тороп ҡалыр тип тә уйламағанмын. Ул ғына ла түгел, ҡатыны менән айырылышып, бер ҡайҙа ла эшләмәгән, сиргә дусар булған Ғаяз ҡустымды ла яныбыҙға алырға мәжбүр булдыҡ.

Туғандың аҙыры булһа ла биҙере юҡ, тиҙәр бит.

Улыбыҙ Зәһир әле өйләнмәгән, яныбыҙҙа, урмансылыҡта эшләп йөрөй. Ҡыҙыбыҙ ситтә, Сургутта эшләй, ике балаһын әлегә тиклем үҙебеҙ ҡарап торҙоҡ. Бына шулай итеп, өй тулы ир-егет, ейән-ейәнсәр менән мәж килеп йәшәп ятҡан көнөбөҙ. Сәлим хәҙер ауылда ҡоролтай рәйесе, киленебеҙҙең (ул ауыл хакимиәте башлығы) уң ҡулы, ныҡ ярҙам итә уға, үҙенең етәкселек эш тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Ғөмүмән, беҙ икебеҙ ҙә ғүмер буйы йәмәғәт эштәренең уртаһында ҡайнаныҡ. Сәлим комсомол секретары булған йылдарҙан алып. Ул саҡ беҙҙең гөрләп торған йәштәр үҙәге эшмәкәрлеге хаҡында Мәскәүҙән килеп тә гәзиткә яҙғайнылар хатта. Йәштәр үҙәгеҙ мәктәп подвалында асып ебәргәйнек: тир, бильярд бүлмәләре, видеозал, хатта буфет эшләне. Үкенескә, хәҙер йәштәр тормош-көнкүреш мәшәҡәттәренә батты, ойоштороу һәм йәмәғәт эштәре онотолдо. Дөрөҫ, был хәлдә уларҙың ғына ғәйебе тип тә әйтеп булмай. Заманы шулай, тиергә тура килә.

**➔ Заманы шулай, тип ятмайһығыҙ бит әле үҙегеҙ бер ҙә, афарин. Мин бөгөнгө көндә Наилә Наил ҡыҙы етәкләгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлеген һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған "Фатиха" вокаль төркөм ижадын күҙҙә тотам. Үҙегеҙ һөйләп киткән йәшлек йылдарығыҙ ялҡыны һүнмәй ҙә, һүрелмәй ҙә, тимәк?**

- Әйтеүемсә, мәктәп йылдарынан йәмәғәт эштәрендә ҡайнап өйрәнгәс, былдай тормоштан айырылып булмай икән ул, сөнки үҙендә кешеләр араһында тойоу, даими аралашыу донъяның байыта, һығайға көйләй. Бына хәҙер "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлеген ышанып тапшырҙылар. Эште ауылда самогон һәм араҡы һатыусыларға ҡаршы көрәштән башланыҡ, сөнки бөтөн афәт, сир, енәйәттең башы - эскелек. Эсә барып, өйөндә үлеп ятыусылар ҙа булғылап тора, үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыусылар ҙа бар. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ошондай сиргә һабышыуы әрнетә. Улар менән эшләргә лә эшләргә кәрәк әле. Ә инде самогон һатыусыларға исемләп иҫкәртеү хаттары ебәрҙек. Артабан да тыйылмаһалар, махсус органдарға мөрәжәғәт итеп, ҡатыраҡ саралар күрергә мәжбүр буласаҡбыҙ. Шундай матур ауылда йәшәп тә, ни йөрәктәре етеп кеше ағыулаусы, ғүмерҙәрҙе киҫеүсе хәрәм эштәр менән шөғөлләнергә, кәсеп итергә мөмкин икән ул! Исмаһам, алама ҡылыҡтарының гонаһынан тартынһындар ине - юҡ, былдай аллаһыҙҙарҙан тәүбә көтөргә түгел. Күпме фажиғә сәбәбе булып, күҙ йәштәре, кеше ҡарғышына дусар булып йәшәйҙәр. Әлегә беҙгә ауыл тормошон эскелектән араларға, иманһыҙ кәсепселәргә ҡаршы көрәште дауам итергә тура килә.

Яҡты күңелле, унған, изгелекле апайҙар, һеңлекәштәр, килен-еңгәләр ҙә күп ауылда. Шундай йондоҙҙарҙан "Фатиха" вокаль төркөмө төҙөп, йырлап йәшәйбеҙ. Матур итеп, эскеһеҙ байрам - "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" көнөн үткәреп ебәрҙек. Элек былдай ҙур тормошто Ишбирҙеңең күргәне лә булманы, тип рәхмәт әйтеп китәләр. Әйткәндәй, үткән ҡыш буйы Сәлим менән Морат ойоштороп ебәргән спартакиадала ауыл округтары араһында спорт ярыштары барҙы. Үҙем дә спорттан ситтә ҡалышмаҫҡа тырышам: һаулыҡты нығытыу маҡсатында "скандинавса" йәйәү йөрөүҙе ғәҙәткә индерҙем. Минә эйәреп, башҡа ағинәйҙәр ҙә сыҡты.

**➔ Әүҙем йәмәғәтсе, унған хужабикә булыуҙан тыш, уҡытыусы икәнлегеңде лә онотмайыҡ әле, Наилә һылыу. Мәктәптә эштәр нисек? Ишбирҙе мәктәбе тарихында иң тәүге сит тел уҡытыусыһы ла бит әле һин. Ауылдаштарҙан ишетеп белеүемсә, төпкөл мәктәп һинән бик тә унған...**

- Әллә инде, мәктәп ундымы, мин ундыммы, тигәндәй... 32 йыл да булып китте бында эшләүемә. Ауыл балалары өсөн шатланам: мәктәптә өс тел белеп тамамлап сығалар. Иң тәүҙә үҙем ҙа мин туған телебеҙҙе - башҡортсаны яҡшы белеүҙәрен талап итәм, сөнки оло тормошҡа юл, ҙур донъя әсә теле аша асыла. Үҙем дә башҡорт телен ҡайтанан камил үҙләштереүгә көстө күп һалдым, сөнки тел белгесе иң тәүҙә туған телен белергә бурыслы. Унан һуң, башҡорт һәм инглиз телмәрендә булған өнөҡшаш уртаҡлыҡтар, мәҫәлән, ҙ, ҫ, ү, ә өндәре сит телдә дөрөҫ, таҙа һөйләшкә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, йәбай ғына бер миҫал: урыҫ кешеһенең: "Сэнк ю" тигәненә ҡарағанда, башҡорттоң көс һалмайынса ғына туған өнө ярҙамында: "Сәнк ю" тигәне бер ниндәй акцентһыҙлығы менән отошлораҡ бит барыбер. Әңгәмәсенең быны ҡабул итеү эмоцияһы ла мөһим, тип уйлайым. Шөкөр, 20 уҡыусым минең юлдан китте: сит тел буйынса махсуслаштылар. Өсәүһе АҠШ-ка барып ҡайтты, икәүһе әлеге ваҡытта Нью-Йоркта йәшәй. Мәктәп уҡыусылары даими рәүештә район олимпиадалары призерҙары булып тора, имтихандарҙы ла унышлы тапшыралар. Үҙ эшеңә баһа биреүе ҡыйынраҡ булһа ла билдәле факттарҙы ситләтеп үтә алманым инде. Әйткәндәй, ситтән бер абруйлы фекер ҙә күңелемдә йылытып тора гел. Билдәле ғалим, профессор, илһөйәр һәм телһөйәр ил ағаларының береһе Сәфәрғәле ағай Йәнтүриндың бер осрашыуҙа әйткәне булыр: "Беҙҙең Сибай институтында студенттар инглиз теленән яҡшы өлгәшһә, унан "Һин Ишбирҙенәнме әллә?" тип һорай һалалар, сөнки ишбирҙәләр фәҡәт телде яҡшы белеүҙәре менән айырыла". Был һүҙҙәрҙе мин эшемә ҡарата ҙур баһа тип ҡабул итәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Баһа, тигәндән, Наилә Наил ҡыҙынан был хаҡта ҡыҙыҡһына ҡалғас, ул:"Юғары категориянан башҡа бер ниндәй ҙә регалияларым юҡ",- тине унайһыҙлана биреп. Награда өсөн эшләмәйбеҙ - уныһы дөрөҫ, ләкин эшенде күрә белеүҙәре, дарманыңды күтәреп, артабанғы уныштарға дәртләндереп ебәрә алыуҙары ла бик мөһим бит донъялыкта хеҙмәт кешеһе өсөн. Етмәһә, быйыл Наилә Наил ҡыҙының күркәм генә юбилейы ла етеп килә икән. Хәйер, ауыл ағинәйҙәре күптән үҙ баһаһын биргән инде уға: Наиләбеҙ йөрәгендә ҡар өҫтөндә усаҡ ҡабыҙыр ялҡын бар, ти улар. Эйе,Наилә һылыу үҙе әйтмешләй, донъябыҙҙа - именлек, ғаиләбеҙҙә - татыулыҡ, эштәребеҙҙә арҡаҙаштар булғанда, быны яҙмышыңдың оло бүләге, тип ҡабул ҡылып, Илаһыңа, заманыңа рәхмәтле булып йәшәүҙә бит тормош асылы.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әңгәмәләште.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ИКЕ АЛТЫН ҠАҒИҘӘ

**Көнсығышта: "Кешенең иң насар дуҫтары ла уның үҙенең фекерҙәре килтергән тиклем насарлыҡ теләй алмай", - тигән әйтем йәшәй. Иң билдәле дауалаусы Ибн Сина ла: "Ауырыу менән көрәшеү өсөн табиптың өс сараһы бар: һүҙ, үҫемлек, бысаҡ", - ти.**

Иғтибар итегеҙ - һүҙҙе ул беренсе урынға ҡуя.

Париж госпиталдәренең береһендә йәш психолог Эмили Кьи, үҙенә яуаплылыҡ алып, ауырыуҙарға көнөнә өс тапҡыр эстән генә йәки ҡысҡырып: "Көндән-көн үҙемде яҡшыраҡ тоям", - тип 10 тапҡыр механик рәүештә түгел, ә хис-тойғо ҡушып ҡабатларға ҡуша. Һөҙөмтәлә бер айҙан һуң тап ошо табиптың пациенттары госпиталдең, һуңынан тотош Францияның медицина персоналының теләнән төшмәй. Аптырарлыҡ, әммә раҫ: ауыр сирлеләр бер ай эсендә һауыға, ҡайһы берҙәренә хатта хирургик ярҙам зарурлығы ла кәрәкмәй.

Йәғни боронғо бөйөк ғалим Парацельстың күҙаллауы дөрөҫкә сыға: ышаныс мөғжизә тыуҙыра. Беҙҙең сәләмәтлегебеҙ - фекерләүебеҙҙең туранан-тура эҙемтәһе. Берәү ҙә хәҙер кешенең психик һәм физик сәләмәтлеге араһында туранан-тура бәйләнеш булыуын инҡар итмәй.

"Барлыҡ ауырыуҙарҙан һәм инфекцияларҙан иң яҡшы һаҡ - үҙеңдең сәләмәт булыуыңа ныҡлы ышаныс һәм ынғай хис-тойғолар, - ти 20 йыллыҡ стажы булған психотерапевт Андрей Метельский. - Кире уйҙар емергес көскә эйә. Мәҫәлән, асыу ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙарын тыуҙыра. Үпкәләү бауыр, ашҡаҙан асты биҙе ауырыуҙарына, холециститка килтерә". Иң мөһим психологик ҡанун: кемгә яратыу, һоҡланыу һүҙҙәре әйтелә, шул кешенең тормош энергияһы арта. Ә асыулы, кире һүҙҙәр, киреһенсә, тыңлаусының энергияһын кәмetә.

Кире уй-фекерҙәр менән бәйләнгән сирҙәр һаны арткандан-арта бара. Уларға ҡаршы тороу өсөн боронғо аҡыл эйәләренең кәңәшенә ҡолаҡ һалыу зарур - тормош ни тиклем ауыр булмаһын, уға ҡыуанырға кәрәк!

Шулай итеп, кешенең яҙмышы уның уйҙарына бәйле. Яҡшылыҡ уйлаһаң - яҡшылыҡ алырһың, насарлыҡ уйлаһаң - насарлыҡ килер. Даими уйлаған нәмә булырға тейешле йәки булыуы ихтимал инаныуға әйләнә. Был инаныу ваҡиға тыуҙыра... Шуға күрә, бөгөндән бары тик яҡшы уйҙар ғына уйлайбыҙ һәм бары тик яҡшыға ғына өмөтләнәбеҙ. Һәм бер ваҡытта ла юҡ-бар өсөн көймәйбеҙ. Америка кардиологы, инфарктарҙы һәм йөрәк етешһеҙлектәрен профилактикалау буйынса абруйлы белгес Роберт Элиоттың ике алтын ҡағиҙәһе менән ҡоралланабыҙ. Беренсе ҡағиҙә: юҡ-бар өсөн көймәгеҙ. Икенсе ҡағиҙә: бөтөн нәмә - юҡ-бар.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Еҫ хәтере әлеге ваҡытта булған нәмәләр тураһында ғына һөйләмәй, ниндәйҙер махсус хәтерҙә хәрәкәткә килтерә. Мәҫәлән, саперҙарҙы еҫ хәтеренә нигеҙләнеп бомбаларҙы зарарһыҙландырырға өйрәтәләр.

## Ниндәй хәтер яҡшыраҡ?

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, уны ҡабул итеүҙә бөтөн тәрҙәр ҙә ҡулланылғанда мәғлүмәт яҡшыраҡ хәтерҙә ҡала, ти профессор, РАМН-дың кеше морфологияһы ғилми-тикшеренеү институтының эмбриология бүлеге етәксеһе Сергей Савельев. Хәтерҙә ҡалдырыуҙы көсәйтеү өсөн төрлө системаларҙан: күреү, ишетеү, еҫ тойоу, мускулдар - күберәк күҙәнәктәрҙе йәлеп итергә кәрәк. Юҡҡа ғына әлеге ваҡытта белем биреү учреждениеларында уйын аша уҡытыуға иғтибар бүлмәйҙәр.

## Тестар

Бер минут дауамында һүҙҙәрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ: планка, банкир, соус, эс, рептилия, лобстер, оркестр, маңлай, жюри. Минут үткәс, был һүҙҙәрҙе ситкә һалығыҙ ҙа, таймерҙы 20 минутка ҡуйып, икенсе эштәр менән булышығыҙ. 20 минуттан һуң иҫегеҙҙә ҡалған барлыҡ һүҙҙәрҙе яҙырға тырышығыҙ. Иң юғары һөҙөмтә - 8 һүҙ. Әгәр кәмерәк икән - уртаса күрһәткес, 4 һүҙҙән дә кәм булһа - түбән күрһәткес, һеҙгә хәтерегеҙҙе күнектерергә кәрәк.

## Ишетеү хәтере

Берәйһенән Бертольд Брехттың түбәндәге цитатаһын өс тапҡыр ҡысҡырып уҡыуын һорағыҙ. "Я научился водить машину, но только одну. А нужно уметь водить две, то есть еще и ту, что едет перед твоей. Только тогда знаешь, что делать со своей собственной". Хәҙер был өҙөктө нисек хәтерегеҙҙә ҡалған, шулай итеп яҙығыҙ. Әгәр хәтерегеҙ яҡшы булһа, һеҙ уны бер ауырлыҡһыҙ иҫләй һәм хатаһыҙ яҙа алырһығыҙ.

## Ассоциатив хәтер

Пиктограммаларға мөрәжәғәт итәйек. Пиктограмма тип бер йәки бер нисә мәғәнә аңлатҡан ҙур булмаған символик схемалы һүрәттәр атала. Мәҫәлән, "уйлау" һүҙен баш һүрәтен төшөрөп аңлатырға мөмкин. Һеҙгә тиҙ генә 20 һүҙгә йәки һүҙбәйләнешкә пикторграмма эшләп, һуңынан уларҙы аңларға кәрәк. 1. Дауаланыу. 2. Ирегән ҡар. 3. Сир. 4. Айырылыу. 5. Арыу. 6. Асыу. 7. Көслө ел. 8. Матур кеше. 9. Ауыр юл. 10. Хис-тойғо. 11. Ауыр сәнәғәт. 12. Ҡурсаулыҡ. 13. Проблема. 14. Төрҡөм. 15. Ғазапланыу. 16. Бәләкәй ҡыҙ. 17. Йыһанды үҙләштереү. 18. Йоҡо. 19. Яман тауыш. 20. Тәүәккәллек.

Бер һүрәткә бер минут ваҡыт бирелә. Һүрәт ыҡсым булырға, хәрефтәр йәки һүҙҙәр ҡулланылмаҫҡа тейеш. Һүрәттәрҙе ситкә һалып ҡуйып, 20 минут икенсе эш менән шөғөлләнегеҙ ҙә, һуңынан уларға ҡарап, баштағы һүҙҙәрҙе йәки һүҙбәйләнеште хәтерегеҙҙә тергеҙергә тырышығыҙ. Әгәр 15 йәки унан күберәк һүҙҙе аныҡ билдәләһәгеҙ, ассоциатив хәтерегеҙ бик яҡшы. Әгәр әҙерәк булһа - күнегегеҙ!

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# АРХИТЕКТОРҘАРҒА АРНАЛА




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Итеге. Белорет. Ҡырмыҫҡа. Шүлгән. Утрау. Ауыҙ. Әкәмәт. Граф. Украина. Магл. Йорт. Арыш. Дастан. Ылҡа. Такси. Айыу. Неон. Мотив. Алло. Ҡуян.

**Вертикаль буйынса:** Урмансы. Ҡурсаулыҡ. Умарта. Бром. Йомран. Ылаҡ. Талҡаҫ. Штурм. Гай. Офоҡ. Айҙар. Көрт. Егерь. Идея. Шәрәфетдинов. Мусин. Грим. Нафталин.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## БӘЙГЕЛӘ ҠАТНАШ

**2020 йылда республикала үтәсәк VI Бөтөн донъя фольклориадаһы логотибы һәм символына конкурс иғлан ителде.**

Республика халыҡ ижады үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, логотип заманса, үҙенсәлекле булырға, Фольклориаданың идеяһын сағылдырырға тейеш. Конкурста дизайн эшен белгән белгестәр ҡатнаша ала. Еңеүсегә аҡсалата бүләк ҡаралған. Иң яҡшы логотип Фольклориада - 2020 символы итеп билдәләнәсәк. Эскиздар gukrcnt@mail.ru электрон почтаһына 27 октябргә тиклем ҡабул ителә. Белешмә өсөн телефон: 8(347)289-66-47.

## СӘСӘНМЕН ТИП КЕМ ӘЙТМӘҪ...

**Өфөлә 25-26 октябрҙә Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале уҙғарыла. Башҡортостандан ҡатнашыусылар өсөн конкурстың һайлап алыу туры интернетта 1 сентябрҙә башланды һәм 15 октябргә тиклем дауам итә.**

Бәйгелә ҡатнашыусылар бер видеороликта ике әҫәр: эпик материалды аутентик уҡыу, эпик материалды ижади уҡыу (стилләштереү, импровизация, яңғыҙ йәки ансамбль менән уҡыу) йәки автор әҫәрен тәҡдим итергә тейеш. Милли кейемдең булыуы мотлаҡ, диалект һөйләштәрен ҡулланырға мөмкин, тип хәбәр итте ойоштороусылар.

Һайлап алыу турын үткәндәр Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивалендә ҡатнаша.

Сара 2020 йылда Башҡортостанда уҙғарылырға тейешле Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек этаптарының береһе булып тора.

## ОҘОН КӨЙ ЙЫРЛАП...

**"Оҙон көй" төбәк-ара башҡорт халыҡ йыры конкурсына ғаризалар ҡабул ителә. Сара 9-11 ноябрҙә Туймазыла уҙғарыла. Маҡсаты - һәләтле халыҡ башҡарыусыларын асыҡлау һәм пропагандалау, оҙон көйҙө башҡарыуҙы тергеҙеү һәм үҫтереү, урындағы башҡорт йыр фольклорын тергеҙеү.**

Конкурста махсус вокаль белеме булмаған теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Ижади бәйгелә ҡатнашыусылар өсөн йәш сикләүе лә юҡ. Конкурс 16 йәшкә тиклемгеләр, 16-60 йәшлектәр һәм 60 йәштән өлкәндәр араһында ике турҙа уҙғарыла. 16 йәшкәсә ҡатнашыусылар ике турҙа ла үҙҙәре һайлаған йырҙы башҡара. Ҡалған конкурсанттар мотлаҡ башҡарылырға тейеш йырҙар -улар "Урал", "Буранбай", "Ашҡаҙар", "Сибай". Ҡатнашыусының теләге буйынса йыр башҡорт халыҡ йыр классикаһы әҫәре йәки башҡарыусының тыуған төйәгендәге башҡорт йыр фольклоры өлгөһө булыуы мөмкин. Ғаризалар 2018 йылдың 1 ноябренә тиклем ҡабул ителә. Электрон адрес: gukrcnt@mail.ru. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефондар: 8(347)289-65-50, 8(34782)7-34-28, 7-24-51. Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Туймазы районы хакимиәте.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм-Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (28) дүшәмбе | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:03 | 18:33 | 20:03 |
| 9 (29) шишәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:01 | 18:31 | 20:01 |
| 10 (1) шаршамбы | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 16:58 | 18:28 | 19:58 |
| 11 (2) кесе йома | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 16:56 | 18:26 | 19:56 |
| 12 (3) йома | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 16:53 | 18:23 | 19:53 |
| 13 (4) шәмбе | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 16:51 | 18:21 | 19:51 |
| 14 (5) йәкшәмбе | 6:14 | 7:44 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 октябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия 12+
**7 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**9 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**10 октябрь "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
**12 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 октябрь "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди 16+
**7 октябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+
**9 октябрь "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6-7 октябрь "О чем поет осень?" (**Н. Беззубова, А. Верхоземский). Башлана 16.00 0+
**6 октябрь "Буратино"** (А. Толстой). Башлана 12.00, 14.00 0+
**7 октябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). Башлана 12.00, 14.00 0+

✔ *Байҙарҙың ҡоймаһы бейек булыр, эстәре көйөк булыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# ИҢ ҘУР БҮЛӘК...

## бөйөк йырсының баһаһы булды



**Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжында Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, С. Юлаев ордены кавалеры Абдулла Солтанов призына башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһе үтте. Бәйге йырсының 90 йәшлек юбилейына бағышланды. Профессиональ йырсылар араһында Рәфис ИШБАЕВ Гран-при яуланы. Уның менән ошо турала әңгәмәләшәбеҙ.**

**Рәфис Ишбаев күптәргә эстрада йырсыһы булараҡ таныштыр, моғайын...**

- Йәштәргә эстрада йырсыһы булараҡ таныш булһам, өлкән быуын мине ретро йырҙар башҡарыусы итеп тә таныйҙыр. Халыҡ йырҙарынан әлегә репертуарымда 20 боронғо йыр бар. Уҡытыусым - Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыров. Иң тәүҙә "Азамат"ты йырлағайным, сөнки ул халыҡ йырҙары араһында иң еңеле, уны балалар ҙа башҡара ала.

Йырсы Ильяс Кинйәғолов менән дуэт итеп тә йырлайбыҙ. Әлеге мәлдә үҙебеҙ өсөн дә ҡыҙыҡлы проект өҫтөндә эшләйбеҙ - альбом яҙҙырабыҙ. Башҡорт эстрадаһы барлыҡҡа килгән осорҙа йырҙар йыйынтығы яҙҙырыу ғәҙәти хәл ине. Бөгөн башҡа заман, йырҙарҙы ла башҡараҡ форматта тыңлайҙар. Шуға ла диск яҙҙырыу заманса түгел, тип, альбомды махсус флешкаға яҙҙырабыҙ. Йыйынтыҡ ретро йырҙарҙан төҙөлгән. Был йырҙарҙы өлкән быуын да, йәштәр ҙә белә, тыңлай һәм үҙе лә йырлай. Мәҫәлән, "Ишкәксе", "Сылтыр шишмә", "Ғүмерҙәр үтә икән ул" һәм башҡа. Шуға был йыйынтыҡ уларҙың барыһына ла үҙенсәлекле бүләк булыр, тип өмөтләнәбеҙ.

**Яңыраҡ Учалыла үткән Абдулла Солтанов призына башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһенән ниндәй хис-тойғолар менән ҡайттың?**

- Төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашҡан һайын яңы тәжрибә туплайһың, ижадың байый. Күңелде лә үҫтереп ебәрә бындай саралар. Уҡытыусым Рәйлә Әкрәм ҡыҙы Бикбирҙина, Абдулла Солтановтың йырлауын тыңлағыҙ, унан өйрәнегеҙ, тип кәңәш итә торғайны. Шуға ла мин был йырсыны тыңлап үҫтем тип әйтә алам. Шундай киң диапазонлы йырсының башҡарыуында оҙон йырҙар бигерәк үҙенсәлекле яңғырай. Моңлораҡ, тәрәнерәк, халыҡсаныраҡ. Быға уҡыу йорттарында өйрәнеп булмай, уға өйрәтеп тә булмайҙыр. Абдулла Солтанов минең өсөн оло шәхес. Уның призына үткәрелгән бәйге лә башҡа, юғарыраҡ кимәлдәге бәйгеләрҙән ҡәҙерлерәк хатта. Абдулла ағайҙың: "Маладис, ҡустым", - тип, матур һүҙҙәр әйтеп, киләсәк ижадыма уңыштар теләүе күңелгә дәрт һалды.

Әйткәндәй, Абдулла Солтанов үҙе ҡушылып йырлаясаҡ ҡурайсыһына ла бик талапсан икәнен беләм. Үҙем дә халыҡ йырын ҡурай оҙатыуында йырларға яратам, ул саҡта йыр матурыраҡ яңғырай. Был бәйгелә мин Фәнил Кинйәғолов менән сығыш яһаным һәм "Урал" менән "Уйыл"ды йырланым. Абдулла ағай үҙе баһалама составында булды. Уның ихласлығына, йәштәрсә дәртенә һоҡланып ҡайттым. Баймаҡ, Әбйәлил, Ишембай, Белорет, Ғафури, Хәйбулла, Учалы райондарынан бәйгеселәр килгәйне, улар бер нисә категорияға бүленде, бәләкәй балалар ҙа, 80 йәште үткәндәр ҙә ҡатнашты. Конкурс шарттары буйынса, "Урал", "Сибай", "Һандуғас", "Ҡаһым түрә", "Азамат", "Бейеш" кеүек оҙон көйҙәрҙе белергә тейеш инек. Мин профессиональ йырсылар араһында Гран-при яуланым.

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ҺИКҺӘН ЙЫЛЛЫҠ ИЖАД

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы 80-се ижад миҙгелен асты. Юбилей миҙгеле ҡыҙыҡлы сараларға бай булмаҡсы.**

"Башҡорт дәүләт филармонияһы 80 йыллыҡ юбилейын билдәләй, тигәс, кемдер ниндәйҙер яңылыҡтар, үҙгәрештәр көтәлер. Әммә беҙ үҙебеҙҙең ошо йылдар эсендә барлыҡҡа килгән йолаларыбыҙға тоғробоҙ. Республиканың төп концерт ойошмаһы булараҡ, был миҙгелдә лә ошо исемгә тап төшөрмәҫкә тырышасаҡбыҙ", - тине ойошманың реклама һәм йәмәғәт бәйләнештәре буйынса бүлеге етәксеһе Ирина Захарова журналистар менән осрашыуҙа. Ысынлап та, күп бөйөк шәхестәребеҙҙең - Фәйзи Ғәскәров, Хәбир Ғәлимов, Баныу Вәлиева, Ғабдрахман Хәбибуллин, Фәриҙә Ҡудашева, Николай Голов, Мәғфирә Ғәлиева, Бәхти Ғайсин, Илфаҡ Смаҡов, Сөләймән Абдуллин, Рамаҙан Йәнбәков һәм башҡаларҙың ижады тап филармония менән бәйле. Шуға ла "80 йыл - 8 кисәлә" циклы ижад миҙгеленең иң күркәм сараһы булыр тип көтөлә. Бер кисә ниндәйҙер бер йүнәлешкә арналасаҡ, бының өсөн махсус рәүештә документтар, ҡулъяҙмалар өйрәнелгән. Идеяның авторы - филармонияның төп режиссеры Сулпан Асҡарова.

Тамашасы һорауы буйынса Марсель Ҡотоевтың "Төштәге йыр" концерты һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ханов менән Башҡортостандың халыҡ артисы Әлфиә Юлсурина ҡатнашлығында "Һин бәхетле! Ә мин?" тамашаһы ҡабаттан күрһәтеләсәк. Филармония артистары - Тимур Рамазан, Рөстәм Шаһбалов, Искәндәр Ғәзизовтың айырым концерттары, шулай уҡ юбилярҙар - Башҡортостандың халыҡ артистары Роза Аҡкучукова, Азамат Тимеров, Нәзифә Ҡадированың концерттары билдәләнгән. Декабрҙә филармония Башҡортостандың халыҡ артисы Абдулла Солтановтың 90 йәшлек юбилейы айҡанлы баш ҡала тамашасыһын йырсы менән осрашыуға саҡыра.

# САЛАУАТ ЮЛЫНАН



**"Родина" кинотеатрында "Салауат юлдары буйлап" тип аталған документаль-сәхнәләштерелгән фильмдың презентацияһы булды. Фильм Рәсәй Президенты грантына төшөрөлгән.**

Билдәле кинематографсы Фәрит Ғәбитов идеяһы буйынса төшөрөлгән фильмдың сценарийын Зөрһә Бураҡаева яҙған. Режиссеры - Таңсулпан Бураҡаева. Фильмды төшөрөүселәр башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев менән уның атаһы Юлай Аҙналинды һөргөнгә оҙатыу юлынан киноэкспедия менән үтә. Фильм да ошо турала. 30 майҙан 20 июнгә тиклем ижади төркөм Рәсәй һәм Эстонияның 12 ҡалаһында була һәм бөйөк батырыбыҙҙың тыуған көнөн Палдискиҙа ҡаршылай.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨНСӨ КӨНӨ - КӨЙӨНӨС

Байҙарҙың ҡоймаһы бейек булыр, эстәре көйөк булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ялған менән хәҡиҡәт араһында... ниндәйҙер кешелеклерәк нәмә өсөн урын бар.

**(Доминик Опольский).**

Йомартлыҡ - ул, тимәк, булдыра алғандан да күберәк биреү, ғорурлыҡ - ул, тимәк, тейешләнән дә аҙыраҡ алыу.

**(Халиль Джебран).**

Никах - бушлай кер йыуҙырыуҙың иң ҡиммәтле ысулы.

**(Франклин Джонс).**

Дошманыңды еңә алмаһаң, уның менән берләш.

**( Теодор Рузвельт).**

Дошманыңды еңер өсөн унан көслө булырға ынтылма, ә уны үҙеңдән көсһөҙ ит.

**(Боронғо ҡытай мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер сауҙагәр үҙенең улын иң ҙур аҡыл эйәһенә Бәхет серен өйрәнергә ебәргән. Үҫмер ҡырҡ көн буйы сүллек аша үтеп, аҡыл эйәһе йәшәгән матур һарайға барып юлыҡҡан. Ләкин аҡыл эйәһе эргәһендә шул тиклем кеше күп, ти, үҫмер ике сәғәт көтөп ултырғандан һуң ғына уның эргәһенә килә алған. Ҡарт үҫмерҙең һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлаған һәм уға "Бәхет серен асырға әлегә ваҡытым юҡ, һин тағы ла ике сәғәт һарай тирәләй йөрөп тор, шунан килерһең", тигән һәм үҫмергә бәләкәй генә бер ҡалаҡ тотторған, уға ике тамсы май тамыҙған һәм: "Йөрөгән саҡта ошо ҡалаҡты һәр ваҡыт ҡулыңда тот, тик майын түгә күрмә", - тигән. Үҫмер һарай тирәһендәге баҫҡыстарҙан бер төшөп, бер менеп, ваҡыт уҙғарған, ә күҙҙәре гел ҡалаҡта булған. Ике сәғәттән әйләнеп килгәс, аҡыл эйәһе унан: "Шунан, минең ашханамдағы келәмдәрҙе күрҙеңме? Баҡсамда ниҙәр үҫә икәнен шәйләнеңме? Минең китапханамдағы матур китаптар күҙеңә салындымы?" - тип һораған. Үҫмер ҡалаҡтағы майҙы түкмәҫ өсөн башҡа бер нигә лә ҡарамауын, бер ни ҙә күрмәүен танырға мәжбүр булған. Аҡыл эйәһе: "Улай булғас, бар, минең донъямдағы мөғжизәләр менән яңынан танышып кил", - тип, үҫмерҙе сығарып ебәргән. Был юлы үҫмер ҡулына ҡалағын тотҡан көйө һарай менән танышырға сығып киткән һәм бындағы бар матурлыҡты, байлыҡты күреп һоҡланған. Аҡыл эйәһе янына килгәс, ул күргәндәрен ентекләп һөйләп биргән. "Ә ҡалағыңдағы ике тамсы майың ҡайҙа һуң?" - тип һораған унан аҡыл эйәһе. Үҫмер ҡалағына ҡараһа, ундағы май ағып бөткәнен күргән. "Һиңә бирә торған берҙән-бер Бәхет сере шул, - тигән аҡыл эйәһе, - донъяның мөғжизәләрен байҡағанда ҡалағыңдағы ике тамсы май тураһында онотма".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1766/10